# Дауыт Юлтый

*(1893 — 1938)*

Ун етенсе йылда революцыя тулҡындары менән башҡорт әҙәбиәтенә бер төркөм яҙыусылар килде. Улар — түбәндән күтәрелеп, үткән тормоштоң әсеһен-сөсөһөн иртә татыған кешеләр — социалистик революцияны тәбрикләп кенә ҡалманылар, бәлки ҡулдарына ҡорал тотоп, совет власын яҡларға сыҡтылар, яу фронттарын кистеләр. Туп тауыштары тынып-тынмаҫтан уҡ улар илде төҙөү эшенә ең һыҙғанып тотондолар: бик күп яуаплы йәмәғәт эштәре башҡарҙылар, гәзит-журналдар сығарҙылар, әҙәби ижад менән шөғөлләнделәр. Шундай милли интеллигенция — зыялылар араһында Дауыт Юлтый ҙа бар ине.

Талантлы бай ижады менән Дауыт Юлтый башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы яҙыусыларҙың береһе булды. Ул — яңы типтағы башҡорт әҙәбиәтенең классигы. Д. Юлтый демократик йөкмәткеле башҡорт матбуғатын, театр сәнғәтен һәм драматургияһын нығытыуҙа ла ғәйәт ҙур хеҙмәт күрһәтте.

**Тормош юлы.** Автобиографик яҙмаһында тыуған өйөн Дауыт Юлтый шулайыраҡ күҙ алдына баҫтыра: ҡош ояһындай ғына балсыҡ өйҙәр араһында бүтәндәрҙән әллә ни айырмаһы булмаған бер кескәй иҫке өй. Өйҙөң тәҙрәләре бер аҙ ҡыйшайып, яңаҡтары нигеҙенә бата төшкән, өлгөләре лә бөтөн түгел, араларында йоҡа таҡта менән көпләнгәндәре, хатта ҡарындыҡ тәҙрәлеләре лә бар. Өйҙөң ҡыйығы ярым асыҡ, фәҡәт ел-ямғыр һуға торған яғы ғына ҡамыш менән ышыҡланған. Ситәндән ойҡаштырылған бәләкәй аҙбарҙан башҡа йорт тирәһендә кәртә-ҡура тигән нәмәләр юҡ. Быларҙан арыраҡ бер нисә байыраҡ кешенең ҙур ҡапҡалы, таҡта йә ҡалай түбәле, ҡойма менән уратылған ҙур ихаталы биш мөйөшлө йорттары һерәйеп күренә.

Ырымбур губернаһындағы Туҡ йылғаһы буйында ултырған Юлтый тигән ауылдың ана шундай ярлы өйҙәренең береһендә 1893 йылдың 18 апрелендә Дауыт Юлтый донъяға килгән. Уларҙың ауылы Быҙаулыҡ өйәҙенең Йомран-табын олоҫона ҡарай. Үҙҙәре йомран-табын ырыуы башҡорттары. Дауыт Юлтыйҙың атабабалары Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың йомран-табын, Мәжит Ғафуриҙың көлсер-табын ырыуҙары менән ырыуҙаш ҡына түгел, бәлки шәжәрәләре менән дә бик яҡын нәҫелдәштәр.

Дауыт Юлтыйҙың атаһы Ишембай ағай алпауыттарға ялланып, күп ғүмерен ялсылыҡта үткәргән кеше. Ләкин күпме генә тир түкмәһен, Ишембай ағайҙың донъяһы әллә ни ҡотаймаған. Уның хәлләнеп алған ваҡыттарында ла бар мөлкәте шул әлеге иҫке өйөнән, бер арыҡ атынан, бер һыйырҙан арыға артмаған. Ир кешенең бар тапҡан-таянғаны ишле ғаиләнең ашау-эсеүенә таҡы-тоҡо ғына етә торған булған.

Бәләкәй Дауытҡа ла ата-әсәһе, ағалары-апалары кеүек (уларҙың ғаиләһендә алты ул, бер ҡыҙ — барлығы туғыҙ йән була), бик йәштән үк күршеләргә алпауытҡа ялсылыҡҡа ялланып тамаҡ туйҙырырға, тир түгеп йәшәргә тура килә. Ул ишле ғаилә иген уңған йылдарҙа йәйге ураҡ өҫтөндә генә бер ни тиклем рәтләнеп ҡала. Шуны хәтерләп «Автобиография»һында Юлтый былай яҙа: «Ашлыҡ бешкәс, бөтә өй эсебеҙ менән бер арбаға тейәлеп, баяр ялаһына ураҡ урырға китәбеҙ, атайым мәрхүм ураҡты бурысҡа алмай торғайны. Сөнки ураҡ йыл әйләнәһендә беҙҙең өй өсөн берҙән-бер йүнле кәсеп. Беҙҙең өй эсендә күмәк ураҡ; бәләкәй булыуға ҡарамайынса, беҙ ҙә урып маташабыҙ. Сөнки аҙыҡ бирәләр. Ашлыҡ үҫкән йылдарҙа ураҡ ҡыйбат була. Беҙҙең ғаилә дүрт баҙар араһы эшләһә, кәмендә йөҙ тәңкә йәки артыҡ эшләй. Беҙҙең өй эсе ураҡ мәлендә генә бер ҡат кейенеп, бер әҙәм рәтле ашап ҡала. Унан һуң ашлыҡ һуҡтырған саҡта бер аҙ кәсеп була. Ләкин унда бөтә ғаилә ҡатнаша алмай, ағайҙар ғына эшләп ҡалалар. Ә йылдың ҡалған айҙары тик тамаҡ өсөн генә эшләнәләр.

Мин тыуған ғаиләнең йыллыҡ килеме (обороты) шулай ине, мин шунда үҫтем».

Мәктәп йәшенә еткәс, Дауыт үҙ ауылында хәлфәгә уҡырға йөрөй башлай. Ләкин был хәлфәнән ул «әлепте таяҡ тип белерлек» тә белем ала алмай. «Хәлфә үҙе кәрәкмәгән тупаҫ һәм уҫал кеше ине. Ҡулында һәр ваҡыт тал сыбыҡ шыйылдап тора, һәр көн арҡаға бер-ике сыбыҡ эләкмәй ҡалмай. Минең күңел һыуынды, унда барғы килмәй башланы», — тип хәтерләй был сағын Юлтый. Ә бала йәнле әсәнең: «Баламды туҡматып үлтерер хәлем юҡ. Күмәк булһа ла, үҙем өсөн береһе лә артыҡ түгел. Ҡуй, йөрөмә, балам!» — тип әйтеүе Дауытҡа етә ҡала — ул хәлфәгә йөрөүен ташлай.

Бының икенсе йылына ауылдарында мәҙрәсә асылғас, Дауыт Юлтый шунда уҡырға төшә. Уларҙы заманына күрә яңы фекерле Хәмзә Юлтыев тигән хәлфә уҡыта. Хәмзә хәлфәгә Дауыт ике ҡыш һабаҡҡа йөрөй. Хәреф таный, төркиҙе һуҡалай башлағас, шәкерт кеше бигерәк тә әҙәби китаптарҙы уҡыу менән мауыға. «Ул ваҡыттағы уҡыу шул тиклем ләззәтле була торғайны, уны хәҙер һөйләп биреү момкин түгел, — тип яҙа был хаҡта Д. Юлтый. — Мәжит Ғафури, Туҡай, Аҡмулла шиғырҙары беҙҙең дәфтәрҙәргә бөтөнләй күсерелеп бөткәйнеләр. Сәғит Рәмиев шиғырҙарын беҙ яттан белә торғайныҡ... Шул төҫлө, Ҡазан китапсылары минең әҙәби яҡтан үҫешем һәм тәрбиәм өсөн ҙур ярҙам иттеләр һәм минең алғы ижадыма юл астылар. Сөнки шулар аша М. Ғафури, Ғ. Туҡай, С. Рәмиев, Ф. Әмирхан, Ҡ. Насыри, Аҡмулла һәм башҡа күп яҙыусыларҙы белдек, уларҙың ижадтары менән һуғарылдыҡ, яңы фекерҙәр алдыҡ. Уларҙың яҙыу методтарын өйрәндек, үҙебеҙ ҡәләм тота башланыҡ».

Тимәк, Дауыт Юлтыйҙың әҙәбиәткә килеүендә ғаиләһенән, атаһынан ҡала, Аҡмулла, Ғабдулла Туҡай, Мәжит Ғафури, Сәғит Рәмиев кеүек шағирҙар поэзияһы көслө йоғонто яһай.

Дауыт Юлтыйҙың әҙәбиәткә, ижадҡа булған дәрте иртә уяна. Башта һалдаткаларға йыр менән хаттар яҙып бирғеләй. Ул яҙған хаттарҙы йәш автор үҙе үк көйләп уҡыуынан һалдатка ецғәләрҙең күҙҙәре йышйыш ҡына йәшләнә торған була. Бындай «тәьҫир итеү» хат яҙыусыны йәнә осондороп, ҡанатландырып ебәрә, еңғә-апайҙар, өҫтәүенә, маҡтау һүҙҙәре яуҙырырға ла һаранланмайҙар.

Алдағы ҡыш Дауыт үҙҙәренән алтмыш саҡрымда ятҡан Сорокин мәҙрәсәһенә уҡырға китә. Бында ул үҙ алдына уҡыу, белемен үҙ аллы күтәреү менән ныҡ шоғөлләнә.

Өфө, Ырымбур кеүек ҙур ҡала мәктәп-мәҙрәсәләренә китеп уҡыу хаҡында хыяллана Дауыт Юлтый. Ләкин ҡала ерендә уҡыу өсөн күп аҡса кәрәк. Күп кенә шәкерттәрҙец йәйен ҡаҙаҡ араһына китеп, балалар уҡытып, аҡса эшләгәндәре шикелле, Дауыт та 1912 йылдыц йәйендә ҡаҙаҡ далаһына юллана, ҡаҙаҡ балаларын уҡыта. Ләкин ҡалала уҡырлыҡ аҡса эшләй алмай, үҙ тыуған ауылында уҡыуын, түбән синыфтарҙа дәрес биреүен дауам итә.

Шулай мәҙрәсәлә уҡытып йөрөгән егет булып еткән сағында, 1914 йылда донъя һуғышы сығып китә. Дауыт Юлтый ике ағаһы менән бер үк ваҡытта тиерлек һалдатҡа алына. Көҙөн күпмелер әҙерлек үткәс, 1915 йылдың башында кыш уртаһында фронтҡа ебәрелә. Шунда уныц өс йылға яҡын ғүмере ут-ҡан, үлем эсендә фронтта үтә. 1916 йылда окопта ғаз менән ағыуланып, бер нисә ай Мәскәү лазаретында ятып һауығып сыға, тағы фронтҡа оҙатыла.

1917 йылдың Февраль революцияһыи ул окопта ҡаршылай. Революция рухлы һалдаттар, офицерҙар менән яҡынлаша; Юлтый Көньяҡ-көнбайыш фронттың мосолман хәрби комитеты ағзаһы итеп һайлана, татар-башҡорт һалдаттары араһында революцҳион эш алып бара.

Октябрь революцияһын да Дауыт Юлтый фронт шарттарында Полтава ҡалаһында ҡаршылай. Был осор инде уның большевиктар менән тығыҙ аралашҡан сағы була. Октябрҙец иҫтәлекле беренсе көнө хаҡында шағир үҙе былай яҙа: «Матвеенко <большевик> менән икәү мосолман һалдаттары ятҡан казармаға киттек. Иң тәүҙә Матвеенко һөйләне. Ул хөкүмәттец Советтар ҡулына күсеүен, фабрика-заводтарҙың эшселәргә бирелерен, Совет хокүмәтенең бөгөндән үк һуғышты бөтөрөү сараларын күреүен һәм солох яһаясағын ҡыҫҡа һәм ялҡынлы итеп аңлатты. Мин уны тәржемә итеп һөйләгәс, һалдаттар ура ҡысҡырып ҡаршы алдылар. Матвеенко китте. Мин мосолман һалдаттары араһында ағитация алып барыу өсөн казармала ҡунырға ҡалдым».

Оҙаҡламай Ҡыҙыл ғвардияға яҙылып, Юлтый Украинала революция дошмандарына ҡаршы яуға инә, унан Петроград фронтына барып сыға, революционер Мулланур Вахитов менән осраша. Революцҳия эше уны 1918 йылдың февралендә тыуған яҡтарына — Туҡсоранға илтә. Бында ул совет власын нығытыу эшенә тотона, советтарҙың өйәҙ һәм ғуберна съездарына делеғат итеп һайлана.

Илдә граждандар һуғышы ҡыҙып киткәс, Дауыт Юлтый ҡулына тағы

ҡорал алырға мәжбүр була. 1919 йылдың мартынан ул Беренсе революцион армияның сәйәсәт бүлегендә хеҙмәт итә, армия ҡаршыһында сыға торған «Ҡыҙыл йондоҙ» тигән хәрби гәзиттең мөхәррире булып эшләй. Журналистика эше менән бергә шиғырҙар яҙырға, фронт гәзиттәрендә баҫтырырға форсатын таба.

Көньяҡ Урал, Ырымбур далалары аҡтарҙан таҙартылғас һәм Беренсе Армия Төркөстан фронтына ҡушылғас, Дауыт Юлтый азат ителгән ерҙәрҙә совет власын аяҡҡа баҫтырыу, халыҡ хужалығын торғоҙоу эшенә ҡалдырыла. Ошо 1919 йылда, фронт шарттарында Коммунистар партияһына инә. Ул яңы ойошоп килгән Туҡсоран кантонының хәрби комиссары итеп тәғәйенләнә. Йәғни уның тылда ла хәрби хеҙмәт эше дауам итә. Уға тылда йәшеренеп ҡалған казак аҡ бандалары, совет власына ҡаршы сыҡҡан төрлө фетнәселәр менән ҡораллы көрәш алып барырға ла тура килә.

Юлтый комиссарҙы хеҙмәттәше Ғ. Ҡыҙрасов иҫтәлегендә шулай тасуирлай: «Уның башында ҡыҙыл түбәле фуражка, өҫтөндә йәшел китель, ҡыҙыл буҫтауҙан тегелгән галифе салбар. Аяҡтарында шпорлы итек. Билендә наган». Ләкин ул үҙ бүлмәһендә фармандар биреп кенә ултырыр комиссар ҙа түгел, гел халыҡ араһында, ярты гүмере һыбай ат өҫтөндә үтә. Ул күп йөрөй, күп эшләй, яҡшы ойоштороусы. «Комиссар Дауыт Юлтый иптәш үҙе лә арымай-талмай гарнизон һалдаттары һәм урындағы халыҡ араһында сәйәси-ағартыу эше алып бара ине, — тип хәтерләй әлеге хеҙмәттәше. — Йыш ҡына әңгәмәләр үткәрә, йыйылыштарҙа докладтар һөйләй, спектаклдәр, кисәләр ойоштороуҙа бик теләп ҡатнаша, декламациялар өсөн шиғырҙар, хатта сәхнәгә ҡуйыу өсөн бәләкәйерәк пьесалар ҙа яҙа ине. Ул саҡта бөтә ил һәм Ҡыҙыл Армия өсөн иң мөһим мәсьәлә — иген әҙерләшеүҙә лә Дауыт Юлтый урындағы етәкселәрҙең береһе булды». Күпмеләр ваҡыт ул Туҡсоран канткомының секретары булып та эшләп ала.

Юлтыйҙы 1920 йылдың башында Стәрлетамаҡҡа, ул саҡта Башҡортостандың баш ҡалаһына, саҡыртып алалар. Республиканың ревком башлығы Әхмәтзәки Вәлиди Дауыт Юлтыйға Башҡортостанда милли матбуғат эшен юлға һалыуҙы тапшыра. Кантондың элекке комиссары хәҙер республика хәрби комиссариатының сәйәси секторында эшләй, «Ҡыҙыл батыр» гәзитен ойоштора һәм уның мөхәррире вазифаһын башҡара. Республика яңыраҡ төҙөлөп, әле милли кадрҙар бик аҙ саҡта, Дауыт Юлтыйға бер үк ваҡытта мәктәптәр бүлегендә инструктор ҙа, Башҡортостан китап нәшриәтендә редактор ҙа, Башҡорт дәүләт театрының әҙәби консультанты ла, комсомол өлкә комитетында бүлек мөдире булырға ла тура килә. «Мин үҙем Дауыт Юлтый менән бергә эшләгәнлектән, — тип яҙа журналист һәм йәмғәт эшмәкәре Заһит Шәрҡи үҙ иҫтәлегендә, — уның ҙур энергия, үҙенә генә хас ҙур күтәренкелек менән был яуаплы эштәрҙе кәмселекһеҙ башҡарырға тырышыуын, шәхси тормошон артҡа ҡалдырып, үҙ-үҙен аямайынса хыянатһыҙ хеҙмәт итеүен әле лә хәтерләйем».

Республикабыҙҙың мәҙәниәт тарихында Дауыт Юлтыйҙың полиграфия базаһын булдырыуҙа һәм китап баҫыу эштәрен юлға һалыуҙа күрһәткән хеҙмәттәре лә ҙур. Ул заман милли китап баҫмаһы мәсьәләләре ауыр

шарттарҙа хәл ителде. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡта хосуси баҫмаларҙың милли полиграфиялары ғына күпләп китап сығарыуҙы тәьмин итерлек түгел ине. Йәш республиканың полиграфик базаһын нығытыуҙа Петроградтың ярҙамы гәйәт ҙур була. Петроград Советы башҡорт ғәҫкәрҙәренең граждандар һуғышы осоронда революция бишеген Юденич армияһы һөжүменән һаҡлауҙа ҙур батырлыҡ күрһәткәндәре өсөн Башҡортостан хөкүмәтенә көнсығыш телдәрендә китап баҫыусы Брагинский типографияһын бүләк итә. Был типография Башҡортостанға килтерелә. Йыһаздарҙы 120 саҡрымлыҡ Раевка станцияһынан Стәрлетамаҡҡа ҡышҡы сатнама һыуыҡта алтмыш йөклө ат ылауы менән килтереүселәр араһында өҫтөнә щинель, аяғына һалдат ботинкаһы кейгән Дауыт Юлтый ҙа була. Полиграфияны ойоштороу, ҡороу, үҙләштереүгә ул етәкселек итә.

Заманса яңы типография булдырылғас, журналдар сығарыу эшен кем юлға һала? Шул уҡ Дауыт Юлтый. 1921 йылдан ул «Башҡортостан хәбәрҙәре» (хәҙерге «Башҡортостан») гәзите мөхәррире лә. 1923 йылда сығарыла башлаған «Яңы юл» (хәҙерге «Ағиҙел») журналының, һуңыраҡ «Белем» (хәҙерге «Башҡортостан уҡытыусыһы»), «Октябрь» журналдарының, «Әҙәби удар» гәзитенең ойоштороусыһы һәм тәүге мөхәррирҙәренең береһе лә шулай уҡ ул.

Ғөмүмән, Дауыт Юлтыйҙың совет осорондағы тормош юлы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге башҡорт милли матбуғатын, нәшриәт эштәрен ойоштороу һәм юлға һалыу менән тығыҙ бәйләнгән. Фән эшенә лә ул күпмелер ваҡытын бүлә алды. Милли мәҙәниәт институтында (хәҙерге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты) ғилми хеҙмәткәр булып та эшләне, башҡорт фольклоры һәм әҙәбиәт тарихы буйынса ғилми-тикшеренеү эштәре алып барҙы.

Дауыт Юлтыйға республикала сәнәғәтте үҫтереү, колхоз хәрәкәтен көсәйтеү буйынса эшселәр һәм крәҫтиәндәр араһында өгөт-нәсихәт алып барыуҙың ауыр бурыстары ла төштө. Коммунистик идеалдарға ышанған, социализмды төҙөү эшенә йәнентәнен биргән Дауыт Юлтыйҙың һәм уның ише хеҙмәттәштәренең, тоғролоҡло коммунистарҙың үҙҙәре төҙөгән, үҙҙәре инанған властың ҡорбандарына әүерелеүе, әлбиттә, бик аянысллы. Дауыт Юлтый утыҙынсы йылдарҙың икенсе яртыһында башланған репрессияларҙың ҡорбаны булып, ғәйепһеҙгә хөкөм ителде һәм 1938 йылда атып үлтерелде. Ҡатыны Фатима апай ҙа, ире артҡаһында репрессияға тарттырылып, 18 йыллыҡ ғүмерен Гулаг лагерҙарында үткәрә. Үкһеҙ етем ҡалған улы менән ҡыҙы балалар йортонда иҫән ҡалды. Хәҙерге көндә ҡыҙы Нинель — Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисткаһы, прима балерина. Улы Таң техникумдарҙа уҡытыусы булып эшләне. «Халыҡ дошманы» тип яманат тағылған атаҡлы улдарының яҡты исемен һәм талантлы ижадтарын халыҡ утыҙ йылға яҡын ваҡыт үткәс кенә аҡлата һәм әҙәбиәтебеҙ хазинаһына ҡайтара алды.

Яҡшы исем-ат, изге эш, талантлы, сауаплы ижад юғалмай һәм онотолмай, тигән хәҡиҡәтте тарих тағы бер ҡат раҫланы.

• • •

1. Дауыт Юлтыйҙың тормош юлы ни яҡтары менән ҡыҙыҡлы һәм ғибрәтле?
2. Уның тормош йылдарының хронологияһын төҙөгөҙ.

**Дауыт Юлтыйҙың революцияға тиклемге ижады.** Дауыт Юлтый шиғырҙарҙы бик иртә, шәкерт саҡтарынан яҙа башлай. Улар башта, ғәҙәттәгесә, өйрәнсек шиғырҙар ине. Уларҙың байтағы Ғ. Туҡай, М. Ғафури һ. б. поэзияһына эйәреүҙән ғибәрәт. «Мин нисек яҙа башланым» тигән мәҡәләһендә Юлтый үҙе лә был хаҡта шулай ти: «Мин Туҡайҙың «Киҫекбаш», «Пар ат» тигән шиғырҙарын, Сәғит Рәмиевтың «Ауыл» тигән шиғырын ярата торғайным. М. Ғафуриҙың «Йәш ғүмерем» китабының яртыһын ятҡа алып бөткәйнем... Ошолар арҡаһында минең үҙемдә шиғыр яҙыу һәләте тыуҙы. Мин беренсе «Йәйге таң» исемле шиғырымды Туҡай йоғонтоһона эйәреп яҙҙым».

Йәш шағирҙың башҡорт халыҡ поэзияһына, бигерәк тә йырҙарына һәм бәйеттәренә, эйәреберәк яҙған шиғырҙары байтаҡ.

1908 йылда яҙылған «Башҡорт хәле» тигән тәүге шиғырҙарының береһе бәйеттәргә оҡшатыбыраҡ ижад ителгән. Унда ер бәйеттәрендәге кеүек борон башҡорттарҙың ерҙәре күплеген һағынып йырлау ҙа, хәҙер иһә ерҙәрҙең һатылып йә киҫеп алынып наҡыҫланып ҡалыуына зарланыу ҙа бар.

*Эй, башҡорттар, ер-һыуығыҙ,*
*малдарығыҙ,*
*Ҡайҙа китте ер һелкеткән*
*дандарығыҙ?*
*Арыҫландай йөрәкле батыр булып,*
*Дошмандарға яу сапҡан*
*шандарығыҙ? —*

тип башҡорт халҡын әүәлге батырлыктары менән сәмләндереүен, ер, ирек өсөн көрәш тарихын иҫкә төшөрөүен дә күрергә мөмкин. Шиғырҙа социаль протест тауыштары ишетелеп ҡалһа ла, йәш авторҙың төп фекере халыҡты уянырға, уҡырға саҡырыр мәғрифәтселек ҡараштарынан әллә ни уҙмай.

Халыҡтың ауыр фәҡир тормошон күреп, йәш шағир шиғырҙарында хәсрәтле уйҙарға, күңел төшөнкөлөгөнә лә бирелеп ала. «Томанлы көндәр» исемле шиғырында яҙғанса, «әсе хәсрәт көйөн көйләп, һыҙыла күңелем көндөҙ вә төнөн», ти. Ләкин ул үҙендә тормошҡа, киләсәккә өмөт менән ҡарарға ла көс таба.

Иң мөһиме, йәш шағир үҙен күңеленә халыҡ ғәмен йыйған уның улы һәм бер йырсыһы итеп тоя. Ул шул замандағы ҡайһы бер романтик шағирҙар шикелле, илһам, ҡайнар дәрт-ялҡындар эҙләп, күктәргә лә ашып китмәй, үҙ мөхитен, ауыл тормошон, тәбиғәт йәмен шиғыр юлдарына һалырға тырыша. Уға әле бөтә донъя классик шағирҙарының рухы һәм поэзиялары шаҡтай йыраҡ, уларҙы эҙ белә, ауыр төшөнә. «Мин түгел Пушкин вә Лермонтов, тағы Байрон түгел, мин түгел ул киң мөхиттә, ул ғаләмдә мин түгел», — ти ул был хаҡта.

*Мин ябай, мин иң түбән*
*Тормош төбөнән бер бала,*
*Йырҙарым да иң түбән тормош*
*Төбөнән моң ала...*
*Йырҙарым шул иң түбән*
*Халҡым йөрәгенән аға.*

Бына шулай, үҙе төпкөл ауылдарҙа йәшәгән мөхиттән, халыҡ йөрәгенән алырға ынтыла ул моңдо үҙ поэзияһына. Шуға уның үткән быуаттың унынсы йылдарында яҙылған шиғырҙарының халыҡ йырҙарына, уның ритм-интонацияларына, шиғри биҙәктәренә яҡынлығы ла осраҡлы түгел ине.

**Беренсе бөтә донъя һуғышы осорондағы шиғырҙары.** Беренсе донъя һуғышы Дауыт Юлтый тормошона һәм ижадына киҫкен үҙгәрештәр алып килде. 1914 йылдың көҙөнән армияға алынып, оҙаҡламай фронтҡа барып эләккәс, һалдаттың окоп тормошо, утлы яу, ҡан-йәш, үлемдәр шинель кейгән, мылтыҡ тотҡан йәш кешене аяныслы уйҙарға, хафаларға һала. Тәүҙә унда шиғыр ҡайғыһы түгел, баш ҡайғыһы көслөрәк.

Бер аҙ окоп тормошона, фронт шарттарына күнегә төшкәс, тыуған ауылына, дуҫы, элекке һабаҡташы Закир Юлтыйға яҙған хаттарында эске донъяһын асыр шиғырҙарға сират етә. Уларҙа һуғышты ул алла ҡарғышы, үҙенең ҡәһәрле яҙмышы кеүегерәк күрә («Некруттар йыры», «Һағыныу йырҙары»).

Тора-бара Дауыт Юлтый һалдаттың донъяға күҙе асылғандай, һуғыштың асылын аңлағандай була. «Шинель», «Сумка», «Ҡан баҙары» кеүек шиғырҙары ошо хаҡта һөйләй.

*Йөҙ вә мең саҡрым һуҙылған*
*Киң фронтта ҡан аға,*
*Йәнҡыярҙар унда асҡан*
*Ит вә ҡандан ҙур баҙар!*
*Ҙур пожар, ҡандан баҙар!..*

*Бында ҡан!.. — Артта Ватан-*
*Пәруар халыҡтар ҡысҡыра:*
*— Барыһынан да беҙгә ҡыйбат,*
*Беҙгә ҡыйбат ил, Ватан!*
*Бында ҡан! Унда Ватан!*

«Шинель» (1915) шиғырыида шинель кейгән һалдат образы күҙ алдына килә. Һалдат йәйен дә, ҡышын да — йыл әйләнәһенә үҙенә окопта түшәге-юрғаны урынына булған, һалҡындарҙан һаҡлаған шиненәнә мең афарин әйтеп, үҙенсә күңелен йыуата.

1916 йылда яҙылған «Сумка» шиғырында иһә шағир ҡыйыу ғына һорауҙар ҡуя: «...өсөнсө йыл ҡанлы һуғыш, ҡасан бөтәр ер өҫтөндә был ҙур вәхшәт, был ҡан түгеш?» — ти.

*Барыһы хәйлә, барыһы золом,*
*Улар тик беҙҙе һаталар,*
*Беҙҙең башты буштан-бушҡа*
*Ҡанға батырып юғалталар, —*

тип яуабын да бирә ул бығa. Был инде һуғышҡа, ҡан ҡойошҡа һалдаттың протест тауышы.

Һалдат баштары иҫәбенә һуғыштан ҙур табыш алған һуғыш суҡмарҙарын — генералдарҙы шағир йәнҡыярҙар тип атай.

Бына Дауыт Юлтый көн дә күреп, тойоп торған тамаша. Алда — ут һәм ҡан аралашып меңәр саҡрымға һуҙылған фронт һыҙығы. Көн дә бында «Меңдәр шәһит[1], меңдәр аяҡҡулһыҙ», ә арыраҡ емерек ауылҡалалар, тирә-яҡта янғын һәм ҡыйралыш. Былар һәммәһе «йәнҡыярҙар асҡан ит вә ҡандан ҙур баҙар» һөҙөмтәһе. Һалдат шағир шуларҙы 1916 йылда яҙылған «Ҡап баҙары» шиғырында йәнле әсенеп тасуирланы. Автор «ҡан баҙарынан» нисек ҡотолоу юлдарын әйтеп бирә алмаһа ла, кемдәрҙең һалдат ғүмерҙәре иҫәбенә байыуын ҡәһәрләп атаны. Ватан исеме менән һалдаттарҙы ут, үлем эсенә ҡыуыусыларҙы «ватанпәруарҙар», йәғни ялған патриоттар, тине.

Дауыт Юлтыйҙың фронтта яҙған шиғырҙары заманында уҡ матбуғат күргән әҫәрҙәр түгел, әлбиттә. Улар фронттан тылға ебәрелгән хаттарында ғына һаҡланып ҡалған. Был турала Юлтый үҙе 1934 йылда сыҡҡан

[1] Шәһит *(ғәр)* — изге эш өсөн ҡорбан булған кеше.

«Әҫәрҙәр»енең I томында былай ти: «Ул ваҡыттағы (йәғни донъя һуғышы йылдарындағы) Закир Юлтый менән минең аралағы хаттар, уларҙың дауамдары, ул ауылда, мин фронтта булып, империализм һуғышына ҡаршы тыуған идеяларҙың үҫеш процестарынан тора, тиһәң дә ярай. Минең иң тәүҙә фронтта яҙылған шиғырҙар һуғышты тасуирлауҙан, ниндәйҙер бер ҡара көстәр арҡаһында миллиондарҙың ҡандары түгелеүгә зарланыуҙан торалар. Һуңға табан быларҙың сәбәптәре тикшерелә, асыла бара. «Шинель», «Сумка» шиғырҙары аша «Ҡан баҙары»на килеп етәләр. Закир мәрхүмдең миңә яҙған хаттарында ла шул уҡ процесс күренә. Сонки ул мәлдәрҙә Закир менән беҙҙең арала хаттар арҡылы ижад бәйләнеше бик ҙур һәм көслө ине. Шуға күрә лә, минең яҙған хаттарҙың Закир Юлтыйға йоғонтоһо ҙур булған кеүек, уның хаттары ла минең ижад өсөн ҙур йоғонто яһаны... «Ҡан баҙары» һәм унан һуңғы революцион рухтағы лирик шиғырҙарымдың тыуыуына ла Закир мәрхүмдең шикһеҙ ҙур йоғонтоһо булды».

Дауыт Юлтыйҙың «Шинель», «Сумка», «Ҡан баҙары» һәм бүтән фронт шиғырҙары заманында хат эстәрендә йәки ҡуйын дәфтәрҙәрендә ҡулъяҙма көйө ҡалһа ла, уларҙың шағир-һалдаттың үҙенең һәм ҡоралдаштарының шул дәүерҙәге уй-кисерештәрен, һуғышҡа мөнәсәбәттәрен аңлауҙа мәғлүм бер әһәмиәттәре бар.

Фронтовик шағир өсөн хатҡа күскән, хат менән ауылдан килгән шиғырҙар, йырҙар, бәйеттәр күңел йыуанысы ла. Һуғыш бәйеттәре тап шул хаҡта һөйләй.

**Революция айҙарындағы һәм артабанғы поэзияһы.** Өс йыл буйы барған һуғыш, батша хөкүмәтенең булдыҡһыҙлығы халыҡта ҙур ризаһыҙлыҡтар тыуҙырҙы. 1917 йылдың февраль айында Петроград, Мәскәү эшселәре демонстрацияларға сығып, революцион көрәшкә күтәрелеп, батшаны тәхеттән ваз кисергә мәжбүр итте. Илдә шулай Февраль революцияһы булып, өс йөҙ йылға һуҙылған батша самодержавиеһы ҡолатылды, халыҡҡа күпмелер демократик хоҡуҡтар иғлан ителде.

Февраль революцияһына Дауыт Юлтый демократик, революцион идеялар менән һуғарылған һалдат-шағир булып китә. Ул һалдаттар, офицерҙар араһында һуғышҡа ҡаршы ризаһыҙлыҡты һәм киҫкен ҡаршылыҡтарҙы үҙе күреп йөрөй, илдә барған боларыш, ризаһыҙлыҡтар тураһында ла ишетеп тора. Шуға ул ниндәйҙер бер үҙгәрештәр булырын, хәҙерге рәхимһеҙлек, золомлоҡтарҙың ғәҙеллек, яҡшылыҡ менән алышынырын, ҡараңғылыҡ урынына барыбер яҡтылыҡ килерен өмөтләнеп көтә.

*Мин көтәмен алғы яҡты таңдан*
*Алтын нурҙар күктән тамғанын;*
*Ҡара төнөм үтеп, ҡояш сығып,*
*Күк уртаға менеп янғанын, —*

тип яҙа ул 1917 йыл башындағы бер шиғырында. Ә Февраль революцияһы алдынан яҙылған «Төнгө йырҙар» шиғырының ел-дауыл, күңел тулҡындары кеүек символик образдарынан илдә дауыллы тарихи хәл-ваҡиғалар булырын тоҫмалларға мөмкин.

«Төнгө йырҙар» шиғырын яҙған сағы — 1917 йылдың ғинуары — Дауыт Юлтыйҙың большевиктар менән туранан-тура аралашып, революцион идеялар менән рухланып

йөрөгән дәүеренә тура килә. Был осорҙа ул дивизия штабында телефонист булып хеҙмәт итә. Шунда эшләгәндә ул Надеждин тигән бер Мәскәү кешеһе менән таныша. Рәсәйҙә барған төрлө хәлдәрҙе, сәйәси ваҡиғаларҙы ла ул большевик Надеждин арҡыры ишетә, уның фекерҙәренә ҡолаҡ һала. Телефонист кеше үҙе лә күпте ишетә, белә башлай. «Ә «Төнгө йырҙар» шул ваҡытта төрлө ҡалаларҙа, фабрика-заводтарҙа барған эшселәрҙең забастовкалары, уларҙың фронтҡа булған протест йоғонтоһо аҫтында яҙылған, — тип аныҡлай быны Дауыт Юлтый. — Сөнки, штабта хеҙмәт иткәс, һәр төрлө яңы хәбәрҙәр тәүҙә беҙгә ишетелә. Күп йәшерен хәрәкәттәр тураһында мәғлүмәт телефон аша бирелә. Ә буш ваҡыттарҙа эшселәр хәрәкәтендәге бөтә яңылыҡтарҙы, һуғышҡа ҡаршы булған ағымдарҙы шәрехләп, матурлап һөйләп бирә. Февраль революцияһы булғас, Надеждин беҙҙең дивизияла сәйәси етәксе булып китте».

Бер ваҡыт Юлтый Надеждин менән Полтаваға телефон аппараттары алыр өсөн командировкаға барғанда уның менән ныҡлы дуҫлаша, хәрби завод эшселәренең забастовка яһауҙарын, һуғышҡа ҡаршы воззвание (саҡырыу мөрәжәғәте) сығарыуҙарын уның ауыҙынан ишетә. Шул күргәндәр, ишеткәндәр тәьҫирендә ул үҙенең «Туп заводында» тигән шиғырын яҙа. Бында ла революцион рух аңҡып тора.

Шулай итеп, Дауыт Юлтый Февраль революцияһын сәйәси идея ағынан шаҡтай үҫкән һалдат-шағир булып ҡаршылай. Фронтта февраль ваҡиғаларынан һуң, һәр бер часта хәрби комитеттар, мосолман роталары төҙөү, һалдаттар араһынан делегаттар һайлап ҙур йыйылыштарҙа, съездарҙа ҡатнашыу шикелле сәйәси-революцион эштәргә ул ныҡлап ылығып китә.

Ләкин революция алып килгән әҙ-мәҙ иркенлектәрҙең дә оҙаҡламай Ваҡытлы хөкүмәт тарафынан юҡҡа сығарылыуы, бигерәк тә яңынан ҡанлы һуғышҡа өндәүҙәр һалдаттар араһында ризаһыҙлыҡты көсәйтә. Дауыт Юлтыйҙың июнь-июль айҙарында яҙылған «Ләғнәт», «Һин ҡайҙа?» кеүек шиғырҙары һалдат массаларының Ваҡытлы хөкүмәттең революцияға ҡаршы сараларына протесын сағылдырған әҫәрҙәр булып тыуа. Азатлыҡҡа зарыҡҡан шағирҙа хөрриәттең әҙ-мәҙ күрер-күрмәҫ көйө яңынан ҡыҫылыуын күреп, контрреволюцияға ҡаршы ләғнәт тойғоһо ҡуҙғала.

Октябрь революцияһына Д. Юлтый ҙур өмөт бағлай. Ул үҙен социалистик революция һалдаты итеп һанай. Яу-революция уты усағында ҡайнаған яҙыусылар хаҡында Анатолий Луначарскийҙың шулай тигәне бар: «Тормош уларҙы ҡайҙа ғына ташламаны, улар ниҙәр генә кисермәне! Ҡайһы бер ҙур яҙыусының бөтә ғүмере буйына күргәнен һәм кисергәнен улар бер аҙнала күберәк күрҙе һәм кисерҙе: империалистик һуғыштың бөтә фажиғәләрен, әллә нисә тапҡырға көслө булған дошманға революция ҡаҙаныштарын бирмәҫ өсөн граждандар һуғышының бөтә ауырлығын татыу, бөтә әсе героик симфонияһын ишетеү һәм бер үк ваҡытта тылыбыҙҙың ҡайғылы, иҫ киткес кире күренештәрен күреү. Уларҙың һәр береһен тиерлек тормош йә ҡыҙыл армеец, йә совет хеҙмәткәре, йәки ығы-зығылы атмосфераның дауыллы елдәре менән өйөрөлгән ҡамғаҡ итеп төньяҡтан көньяҡҡа, көнсығыштан көнбайышҡа ташланы».



Д. Юлтый «Ҡыҙыл йондоҙ» гәзите мөхәррире. *1919 йыл*

Һалдат Дауыт Юлтыйҙың ауыр һәм шанлы яу, көрәш юлы нәҡ ана шундай революция дауылы эсендә үтте, шул юлда уттар-һыуҙар кисте, илебеҙҙең бер фронтынан икенсеһенә барып сыҡты, утлы дауыл ҡосағында революционер-көрәшсе булып сыныҡты. Донъя һуғышы окоптары, Украина, Петроград, Көнсығыш фронттары, ауылда, олоҫтарҙа совет власын урынлаштырыу, мәҙәниәт фронтында эшләү — бына уның ҡайнаған урындары. Ҡоралды һалдат, ҡыҙыл гвардеец, комиссар, кантком секретары, хәрби мөхәррир, партия хеҙмәткәре — революция йылдарындағы төп эш вазифалары.

Октябрь революцияһының тәүге осоронда Дауыт Юлтыйға ижад эше менән шөғөлләнергә һис ваҡыт теймәй. Ул үҙе лә был хаҡта: «Октябрҙең беренсе көндәрендә мин ижад өҫтөндә ултыра алманым. Украинала, Ҡыҙыл гвардия сафында йөрөгән саҡтарҙа, яҙырға түгел, йоҡларға ла ваҡыт табылмай торғайны, — ти. — Әҙәби эш менән 1919 йыл, Беренсе революцион армия штабында «Ҡыҙыл йондоҙ» гәзите идараһында эшләй башлағас ҡына, шөғөлләнергә керештем. Беренсе тапҡыр «Ирек тауышы» һәм «Атлан, батыр!» тигән шиғырҙарым һәм бер нисә нәҫерем сыҡты».

«Ирек тауышы» шиғыры Октябрҙең бер йыллығына бағышланған. Шағир бында большевиктар иғлан иткән төп шиғарҙы яңғырата: «Донъяға — тыныслыҡ! Крәҫтиәндәргә — ер! Эшселәргә — фабрика-заводтар!» Шиғырҙың күп юлдары социалистик революцияның асылын аңлатҡан декларацияларҙы хәтерләтә:

*Беҙ бөгөн төҙҙөк ҡанун —*
*Эшсе-игенсе берлеген.*
*«Берләшегеҙ, донъяның бар*
*Эшселәре!»— Беҙҙә күс,*
*Емерегеҙ ләғнәт капитал*
*Донъяһын, бер ҡанһын үс!*
*Беҙ төҙәбеҙ яҡты донъя,*
*Яҡты тормошҡа нигеҙ,*
*Алғы тормошта булырҙар*
*Бар әҙәмдәр бер тигеҙ.*

Дауыт Юлтый үҙе лә коммунистар вәғәҙә иткән гүзәл социалистик йәмғиәтте төҙөү юлында көрәшә, «илде ҡанда ҡорбан иткән буржуанан ҡан һорау», капитал донъяһын тиҙерәк ҡыйратып бөтөү дәрте менән яна.

Революция яһалыу менән яңы тормош тиҙ генә төҙөлөп китмәй әле. Ерҙәренән яҙған алпауыттар, эре кулактар, завод-фабрикалары тартып алынған буржуалар, халыҡ елкәһендә йәшәгән генералдар, батша

яклы офицерҙар Октябрь революцияһына ҡаршы аяҡланып, тиҙҙән илдә граждандар һуғышын башлап ебәрәләр. Революцион ҡаҙаныштарын яҡлап, хеҙмәтсән халыҡ менән бергә Дауыт Юлтый ҡулына яңынан ҡорал ала, Беренсе революцион армия сафына баҫа. Шунда, үҙе эшләгән фронт гәзитендә «Атлан, батыр!» шиғыры баҫылып сыға. Шағир бында яуыз дошмандарҙы ҡыйратмай тороп илдә ысын азатлыҡ, ныҡлы тыныслыҡ урынлаштырыу мөмкин түгеллеген әйтә. Һәм ҡыҙыл армеецтарҙы ҡыйыу батырлыҡтарға өндәй:

*Атлан, батыр, атҡа, тот һөңгөңдө,*
*Әиҙә, саптыр яуға — дошманға!*
*Сәс гәйрәтең дошман сафтарына,*
*Ауаздарың ашһын асманға!*

Революцион рухы, ағитацион йүнәлеше менән Юлтыйҙың был шиғыры Мәжит Ғафуриҙың шул яулы йылдарҙа яҙылған «Татар егетенә» тигән шиғырына ныҡ ауаздаш.

«Ирек тауышы» ла, «Атлан, батыр!» ҙа жанры, шиғри эшләнеше яғынан революцион осорҙо сағылдырған яңы йокмәткеле һәм яңы формалы декламацион шиғырҙар ине.

«Ниңә табынайым» шиғыры ла шағирҙың яңы заманда революцион ҡайнар уй-тойғоларын сағылдырған оптимистик әҫәре:

*Алдарымда балҡый яҡты йондоҙ,*
*Юлдарым киң, маяҡ теҙелгән.*

*Алда өмөт, алда тормош таңы,*
*Унда яҡты эҙҙәр һыҙылған.*

*Күңелем оса алға, ашҡынам мин,*
*Унда көтә мине аҡ бәхет...*

Бына шулай яҡты киләсәккә ҙур өмөт һәм ышаныс менән ҡарай Дауыт Юлтый. Ул оптимизм Юлтый ише түбәндән күтәрелгән эшсән кешеләргә, революция һәм граждандар һуғышы ут-дауылдарын үткән көрәшселәргә гәҙел социалистик йәмғиәт төҙөү өсөн өҫтәмә дәрт һәм көс бирә.

Граждандар һуғышынан яңы төҙөлөшкә күскән осорҙа инде Дауыт Юлтый — мәҙәни революция һалдаты. Ул башҡорт матбуғатын, яңы төр әҙәбиәтен һәм мәҙәниәтен төҙөшөүсе.

1921 йылда Стәрлетамаҡта Дауыт Юлтыйҙың «Урал моңдары» исемле китабы баҫылып сыға. Уға революцияға тиклем һәм революция, хәрби коммунизм осоронда яҙылған шиғырҙары тупланған. «Яңы быуат йырҙары» тигән бүлектәге шиғырҙары — революция пафосы һәм энтузиазмы менән һуғарылған романтик рухлы әҫәрҙәр.

Ләкин улар үтә абстракт йә шау символикаға ҡоролоуҙары менән шул заман тормошон асыҡ сағылдырыуҙан йыраҡ инеләр. Мәжит Ғафури «Урал моңдары» китабына яҙған рецензияһында Д. Юлтый поэзияһының ана шул абстракт романтизмын, униң ысынбарлыҡ менән бәйләнеше аҙлығын тәнҡитләп сыҡты. Өлкән шағирҙың гәҙел тәнҡит һүҙенә Юлтый ҙур иғтибар менән ҡараны, үҙ поэзияһын яңыртыу хәстәрлеген күрҙе.

«Ул ярһытты йәшлегемде» тигән шиғырында Юлтый әсәһенең ҡумыҙ менән иҫке көйҙәр һыҙған моңһоу өйҙәрен ташлап, иген сәселгән баҫыуҙарға, завод-фабрикалы ҡалаларға яңы йыр йырларға килеүен белдерҙе.

Яңы иҡтисади сәйәсәт (нэп) йылдарында шағир илгә йәйелгән эш таңындағы завод-фабрикаларҙың гудоғында хеҙмәт шауының моңон тоя, тулҡыпланған иген баҫыуҙарының туҡлыҡ, муллыҡ аңҡытыуын һиҙеп ҡыуана; күпме ғүмерҙәр ерҙе



Дауыт Юлтыйҙың «Урал моңдары» китабының тышлығы

йыртҡылап, игенсене ыҙалап килгән боронғо ағас һуҡаны ҙур тимер һабандар таҡҡан трактор алыштырыуына шатланып бөтә алмай. Илгә ырыҫбәхет килтереүсе дәртле йәштәрҙең бөтә күңелдәрен, көстәрен биреп эшләүҙәрен күрә. Бүтәндәрҙе уларҙан үрнәк алырға өндәй. Юлтый поэзияһына шулай азат хеҙмәт темаһы, яңы кешеләр, ҡайнар йөрәкле йәштәр образдары килеп инә.

Нәҡ ошо осорҙарҙа, 1923 йылда, Дауыт Юлтый «Һуҡа бабай, ситкә кит, трактор килә» тигән шиғы яҙа. Был шиғыр халыҡ араһында тиҙ таралып китә. Уны бик күı ятлап ала, сәхнәләрҙән деклам итеп бик йыш уҡыла, шиғыр ҡайһы бер юлдары әйтем рәүешө халыҡ теленә күсә.

Был шиғырҙың уңыш ҡаҙаны ның хикмәте низә һуң? Ҡарама ул ғәҙәти генә декламация шиғы

*Һуҡа бабай, ситкә кит!*
*Ана килә трактор!*
*Зинһар, бабай, йыраҡ тор!*
*Ташла эште, боҙма ерҙе,*
*Ситтән генә ҡарап тор!*

Шундай өндәшеү алымы һ «үтенеү» интонацияһы үҙе үк ш ғырға иғтибарҙы ылыҡтыра. Ҡыҙ ныс яҙмышлы иҫке һуҡаға я заман машинаһын ҡапма-ҡаршы ҡ йып һүрәтләү тормоштағы яңыл тың иҫкелекте ҡыҫырыҡлап сығар уын символлаштыра. Һуҡа — иҫк лек, трактор — яңылыҡ символы.

Ағас һуҡаның ерҙе йыртҡылаı өҙгөләп өҫтән һөрөүенән йүнләп иг уңмауын, кешеләрҙең ашлыҡҡа т мағы туймауын бәйет стилендәрә теҙеп бәйән итеү — һөйләп биреү шиғырҙың һөйләгәндәге шикел ябайлығын һәм хәтерҙә ҡалыуы тәьмин итә.

Дауыт Юлтый башҡорт әҙәбиә тендә халыҡсан һәм тормошсан реа листик яңы поэзияны тыуҙырыу өсө бар һәләтен һалған шағирҙарҙың и күренеклеһе. Уның 20-се, 30-сы йыл дарҙа ижад ителгән күпселек шиғыр ҙары тормоштағы яңылыҡтарҙы илдең ҡеүәте үҫеүен матур-мату факттар аша тормошсан итеп һүрәт ләүе менән айырылып тора.

Мәҫәлән, «Хыял һәм тормош» тигән шиғырында ул «былтыр хыя булған уйҙарҙы быйыл тормош эшкә

уҙғара» барыуын, «кисә дөйә үтә алмаған ҡом сахарала паровоздар бөгөн юл яра» икәнен шатланып йырлай. «Тракторсы йыры» шиғырында иһә «күптән түгел ирҙәр баҙмай торған тракторҙы эшкә ҡушҡан» тракторсы йәш ҡыҙҙың үҙ һүҙҙәре менән эштәге ҡыуаныстарын, техникаға эйә булыуын матур итеп әйтеп бирә.

Юлтыйға заманында гел иҫкелекте һағынып йырлаған шағирҙарға, иҫке традицион поэзияға ҡаршы сығырға ла тура килә («Маташмағыҙ ҡәбер еҫкәтеп», «Иҫкелекте һағыныусы ағайыма хат» шиғырҙары).

Ерҙән, тормоштан айырылып әллә ҡайҙа күктәргә, гәрештәргә ашҡан «күк шағирҙары»на ла әйтер һүҙен әйтте, йәшәгән заманын, уның яңы кешеләре тураһында реалистик әҫәрҙәр яҙырға саҡырҙы («Күк шағирына» шиғыры).

Дауыт Юлтыйҙың 20-се, 30-сы йылдарҙа яҙған шиғырҙары һәм поэмалары илебеҙ тормошоноң, уның уңыштарының һәм етешһеҙлектәренең үҙенсә шиғри йылъяҙмалары кеүек ул. Уның шул яңы осор поэзияһы буйынса совет кешеһенең, шағирҙың үҙенең шул йылдарҙа ниндәй уй-тойғолар, ниндәй шатлыҡтар, ниндәй борсолоуҙар менән йәшәүен асыҡ күрергә мөмкин. Уның совет осоро поэзияһын яңы тормош, социалистик йәмғиәт, заман энтузиазмының үҙенсә бер шиғри сағылышы ла ул. Юлтыйҙың социализм идеяларына инанып, үҙе сафында торған партияһына, хеҙмәт иткән иленә, халҡына һәр саҡ тоғро ҡалыуына шиғриәте йәнә бер төпло дәлил.

Башҡорт совет поэзияһын тыуҙырыу һәм үҫтереү буйынса яңылығы Юлтыйҙың поэтикаһында ла асыҡ күренә. Ул милли поэтиканы жанр формалары (декламация, мөрәжәғәт, иҫтәлек, диалог һ. б.), төрлө рифма, строфа төрҙәре, ритмик интонацион төрлөлөк, интонацион һәм ирекле шиғыр алымдары менән байытты.

**Шағирҙың поэмалары**. Дауыт Юлтый — поэма жанрында ла күндәм эшләгән шағир. Ул — биш поэма авторы. Шуларҙың «Шәрәф», «Мәйсәрә», «Нефть тураһында әкиәт», «Айһылыу» исемлеләре ҙур әһәмиәткә эйә. Быларҙа, исемдәренән үк аңлашылыуынса, яңы кеше — совет кешеһе образы үҙәктә тора.

1922 йылды яҙылған «Шәрәф» исемле поэмаһында Юлтый совет кешеһенең тәүге поэтик портретын һүрәтләне. Шәрәф — Деникин яуҙарын ҡыйратышып ҡайтҡан, Перекопта һуғышҡан ҡыҙыл армеец. Тыуған ауылына ҡайтҡас, аслыҡҡа, бөлгөнлөккә ҡаршы көрәшеп, яңы тормошто тергеҙергә бөтә көсөн һалған алдынғы кеше. Автор Шәрәф йөҙөндә ниндәйҙер уйлап табылған, дөйөмләштерелгән геройҙы алмай, бәлки үҙ тыуған ауылындағы тыуғандарының береһе Шәрәф Юлтый тигән кешене һайлай. Уның тормош юлын, ауыл халҡын аслыҡтан ҡотҡарырға тырышыуын һөйләп сығыу аша ла замандың яңы кешеһе портреты ярайһы уҡ тоҫмаллана. «Шәрәф еңеп ҡаты аслыҡты, яңы тормош өсөн юл асты», — ти шағир.

«Бөгөнгө поэма» исемле шиғырында Юлтый «бөгөн поэманың геройы — шундай заттар, шундай кешеләр: ...гигант завод, удар эшселәр», — тип яҙғайны.

Ошо поэтик күрһәтмәһен Юлтый «Мәйсәрә» (1930) тигән поэмаһында күпмелер дәрәжәлә ғәмәлгә ашыра башлағайны. Был поэмаһында ул ҙур завод тормошон, эшселәрҙең фиҙаҡәр

хеҙмәтен, ударник эшсе образын тасуирлауҙы маҡсат итә. Төп геройҙары итеп, алдынғы эшселәр Сәлмән менән Мәйсәрә образдарын ала.

Сәлмән — ул белгес-эшсе, заводтың ударнигы һәм активисы. Шагир был геройын заводта хеҙмәт ҡосағында, көнкүрештә төрло яҡлап, психологик кисерештәре аша йәнле итеп һүрәтләргә тырыша.

Мәйсәрә образы ла матур эшләнгән. Мәйсәрә ярһыу характерлы, йәшлек дәрте, көрәш ялҡыны бөркөләп торған уңған һәм һөйкөмлө эшсе ҡыҙ булып алға баҫа.

Ишембай ауылы эргәһендә 1932 йыл тәүге нефть фонтаны урғылыуға арнап яҙылған «Нефть тураһында әкиәт» поэмаһында бай нефть ятҡылығын тапҡан һәм үҙләштергән нефтсе эшселәрҙе, инженерҙарҙы Юлтый әкиәт батырҙарынан да көслө заттар итеп тасуирлай.

«Айһылыу» (1933) поэмаһының идея-тематик йөкмәткеһе колхоздар ойоштороу һәм нығытыу, ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәмғиәттә тотҡан роле кеүек мәсьәләләр менән бәйле. Автор үҙәккә оҙон һәм ауыр ғүмер юлы үткән Айһылыу образын ҡуя. Айһылыуҙың иҙелгән ярлы крәҫтиән ҡыҙынан совет власы йылдарында колхоз менән етәкселек итерлек кешегә әйләнеүе аша башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының күркәм образын кәүҙәләндерә.

Дауыт Юлтыйҙың поэмалары кешенең тормош юлы йәки бер нисә эпизод менән бәйле бер сюжеттағы әҫәрҙәр. Уларҙа автор хикәйәләүе йыш ҡына тәбиғәт күренештәрен тасуирлау йәки үҙенең хәл-ваҡиғаларға ҡатнашып китеүе менән аралашып бара.

**Дауыт Юлтый — драматург.** Дауыт Юлтый үҙен драматургияла һәләтле һүҙ оҫтаһы итеп танытты. Уның унға яҡын пьесаһы башҡорт дәүләт театры сәхнәләрендә куйылды һәм репертуарҙа төп урындарҙы алып торҙо.

Ғөмүмән, башҡорт совет драматургияһының тыуыуын һәм формалашыуын, 30-сы йылдар уртаһына тиклемге тарихын Юлтый пьесаларынан һәм театр, драматургия хаҡындағы мәҡәләләренән тыш күҙ алдына баҫтырыу һис мөмкин түгел.

1920 йылда Дауыт Юлтый тәүге һәм иң уңышлы пьесаһы «Ҡарагол» драмаһын яҙа һәм ул башҡорт сәхнәһе сәнгәтендә төп урынды алған классик әҫәргә әйләнә.

Бынан һуң ул тарихи темаға «Салауат һәм Пугачев» тигән драмаһын ижад итә. Был әҫәре лә үҙ заманында уңыш ҡаҙана, гастроль ваҡытында Мәскәүҙә лә күрһәтелә. Быға йәнә «Урланған Көнһылыу» исемле тарихи драмаһы өҫтәлде. «Маҡтымһылыу» тигән музыкаль драмаһы ла башҡорт тарихына бәйле.

Заман темаһына ла бер нисә пьеса бағышланы ул: «Тирмәндә» (үҙгәртелгән варианты «Аралбайҙар»), «Һин кем?», «Табылған Марат», «Йәнтүрә», «Ҡолансәс».

Шуныһы йәл, заманында был пьесалар сәхнәлә уйналып йөрөһәләр ҙә, китап булып баҫылып сыҡмау арҡаһында, ҡулъяҙмалары Дауыт Юлтый үҙе репрессияға эләккәндә архивы менән алынып юҡҡа сығалар. Урыҫ яҙыусыһы Михаил Булгаков, ҡулъяҙмалар янмай, тиһә лә, автор менән ҡулъяҙмалары ла һәләк булып ҡуйғылай икән. Быға репрессияланған күпселек яҙыусыларҙың ҡулға алынған архивы, юғалған ҡулъяҙма әҫәрҙәре дәлил.

**«Ҡарағол» драмаһы.** Туҡсоран кантонында эшләгән сағында Дауыт Юлтый күп кенә ауыл йәштәрен, канткомда эшләүселәрҙе туплап, үҙешмәкәр түңәрәктәр, драма түңәрәктәре ойоштора. Концертта сығыштар өсөн агитшиғырҙар, сәхнә өсөн инсценировкалар, бер шаршаулы кескәй пьесалар яҙып бирә.

Драма түңәрәге ағзалары, һәүәҫкәр артистар Дауыт Юлтыйҙан ике-өс шаршаулы драма әҫәре яҙыуын үтенәләр. Бына шул үтенес буйынса 1920 йылда ул «Ҡарағол» исемле драмаһын ижад итә.

«Дауыт ағай драма түңәрәге ағзалары һәм һәүәҫкәр артистар менән «Ҡарағол»до сәхнәгә ҡуйыу өсөн әҙерләй башланы. Бер нисә репетициянан һуң «Ҡарағол» мең бәлә менән сәхнәгә ҡуйылды, — тип яҙа иҫтәлектәрендә Д. Юлтый менән бергә эшләгән яҡташы, аҙаҡ атаҡлы журналист Ҡасим Аҙнабаев. — Был пьеса ул саҡтағы ауыл сәхнәһе өсөн бик ҡатмарлы әҫәр ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул сәхнәлә ҙур уңыш менән барҙы, тамашасыларға бик оҡшаны, спектаклдә өҙләкһеҙ ҡул сабыуҙар яңғырап торҙо».

Юлтый Стәрлетамаҡҡа эшкә күскәс, ул пьесаны авторҙан Башҡорт дәүләт театры режиссеры Вәли Мортазин һорап ала һәм шул 1920—1921 йылдың ҡышында ҡала сәхнәһендә ҡуя. Спектакль ҡала тамашасыһы тарафынан да алҡышлап ҡаршылана. Башҡорт дәүләт театры репертуарында аҙаҡ төп урынды биләр «Ҡарағол» драмаһы сәхнә тарихын ана шулай башлай.

«Ҡарағол» — тарихи-көнкүреш драма. Уның нигеҙендә XIX быуаттың тәүге яртыһында Башҡортостанда кантонлыҡ осорона ҡараған тарихи ваҡиғалар ята.



Был осорҙа башҡорттар ярым хәрби сословиеға әйләндерелеп, уларҙың азатлыҡ өсөн көрәшен һүндереү маҡсатында армияға алынып, оҙаҡ йылдар хәрби хеҙмәткә мәжбүр ителә. Башҡортостан территорияһы кантондарға бүленеп, уның башына батшалыҡҡа тоғро хеҙмәт итер кантон башлыҡтары тәғәйенләп ҡуйыла. Крайҙы колонизациялау — урыҫ алпауыттарын, татар мырҙаларын башҡорт ерҙәренә күсереп ултыртыу көсәйә.

«Ҡарағол» драмаһына ошо кантонлыҡ осороноң Туҡсоран буйҙарында булған бер хәл-ваҡиғаһы һайлана. Юлтый был әҫәрен шул яҡта киң таралған «Үмәр» исемле легендалы халыҡ йыры сюжетына таянып ижад итә. Алынған герой-персонаждар барыһы ла тиерлек ысынбарлыҡтағы тарихи шәхестәр.

**Драманың конфликты.** Драма урыҫ колонизаторҙары, башҡорт түрәләре менән халыҡ араһында ер, ирек өсөн барған киҫкен көрәшкә, йәғни үткер социаль конфликтҡа, ҡоролған. Ошо конфликт персонаждарҙы ҡапма-ҡаршы ике төркөмгә айыра. Бер яҡта ер, ирек тип даулашҡан батырҙар, халыҡ вәкилдәре — ыңғай образдар. Икенсе яҡта ергә хужа булып, халыҡты талап, иҙеп йәшәүсе баярҙар, кантон түрәләре һәм улар тирәһендәге ялағайҙар — кире образдар. Конфликттың әҙмә-әҙлекле төйөнләнеше, үҫеше һәм кульминацияһы шулай: башҡорт ерҙәрен тартып йә алдатып алыу менән бәйле хәл-ваҡиғалар ҡырҡыулаша барып, халыҡ үҙ ерҙәрен, иркен яҡлап яуға күтәрелергә йыйына һәм аҙаҡтан ҡаты бәрелеш менән тамамлана. Ошонда драманың сюжет үҫеше, драматик үткерлеге

күренә. Драматик конфликт аша төрлө характерҙар асыҡлана. Йәмғиәттәге ике социаль синыф араһындағы ҡаршылыҡ — антогонистик конфликт әҫәрҙең социаль-тарихи йөкмәткеһен тәрәнәйтә, персонаждарҙы социаль типтар юғарылығына күтәрешә. Пьесала һүрәтләнгән баяр Иван Иванович, батюшка Андрей, Ишмырҙа кантон һәм Ҡарағол, Һөйөндөк, Ҡәҙерша, Вася исемле батырҙар шундай социаль типтар. Улар бер үк ваҡытта художестволы дөйөмләштерелгән һәм индивидуаль һыҙаттар менән асылған характерҙар ҙа.

**Ыңғай образдар.** Ер, ирек өсөн көрәшкән, халыҡ мәнфәғәтен яҡлаған Ҡарағол, Һөйөндөк, Ҡәҙерша, Вася кеүек батыр ир-егеттәр, уларға теләктәш Ҡыраубикә, Таңсулпан, Наташа кеүек ҡатын-ҡыҙҙар драмала ыңғай образдар булып һынланалар.

Пьесаның топ персонажы **Ҡарағол** — аҡыллы һәм баһадир ир. Ул Ишмырҙа кантон, баяр Иван Иванович, Әпкәләй ише халыҡты талап, улар көсөнән файҙаланып йәшәгән кешеләрҙе күрә алмай, уларға сикһеҙ асыу һаҡлай. Батыр һәм намыҫлы Ҡарағол үс-асыу һаҡлап, эстән быҫҡып ҡына йәшәмәй, халыҡтың һәм үҙенең түҙеме бөткән мәлдә, халыҡ үсен иҙеүселәргә ҡаршы көрәшкә йүнәлтерлек, хатта ҡоралды яуға күтәрерлек кос таба. Ул үҙ тирәһенә ҡыйырһытылған башҡорт ир-егеттәрен генә түгел, ә рус крепостнойҙарын да бергә туплай, уларҙың Вася исемле ҡыйыу башлыҡтары менән берлектә эш итә.

Ҡарағол образында Дауыт Юлтый халыҡ ирке өсөн яуға сығыр башҡорт батырҙарының бер гәййәр кешеһен кәүҙәләндерә. Пьесаға нигеҙ булған Үмәр легендаһына ҡарағанда, Ҡарағол — тарихи шәхес, элекке Туҡсоран буйы яу батырҙарының береһе.

Ҡарағол аҡһаҡалдар, әсәһе Ҡыраубикә һүҙенә ҡолаҡ һалып, уйлап, аҡыллы эш ҡылыуы, кәрәк мәлендә ҡыйыу була алыуы, иптәштәре менән яҡшы мөғәмәлелеге, игелекле ата кеше булыуы менән дә һоҡландыра.

Күрше ырыу батырҙарынан **Ҡәҙерша, Һөйөндөк** — иң яҡын дуҫ-ярандары. Ана шундай ҡәҙерле һәм гәййәр улдары менән дә халыҡ көслө. Шундай ир-егеттәрен, Үмәр легендаһындағы кеүек, легенда, йыр, хәтирә итеп тә күңел түрендә һаҡлай һәм киләсәк быуындарға улар исемен үрнәк итеп илтә, еткерә килә. Дауыт Юлтыйҙың «Ҡарағол» драмаһы ана шундай батыр ир-егеттәрҙең мөһабәт образдарын һынландырыуы, улар аша халыҡта героик тарихы, батыр улдары менән горурлыҡ тәрбиәләүе йәһәтенән әһәмиәтле.

Пьесалағы ҡатын-ҡыҙ образдарынан Ҡараголдоң әсәһе **Ҡыраубикә** хәтерҙә ҡала. Ҡыраубикә — күпте күргән, күпте кисергән әсә, ул башҡорт халҡының элекке күтәрелештәренә лә шаһит. Шуға ла ҡанлы яу эшенә, улының бола сығарырға йөрөүенә башта үтә һағайып, борсолоп ҡарай. Улын был хәтәр эштән тыймаҡсы ла була, хөкөм ҡатылығынан ҡурҡа. Әммә халыҡтың йөберләнеүен күргән әсә улы Ҡарағолға баш күтәрергә фатиха бирып кенә ҡалмай, уға аҡыллы кәңәштәре менән дә ярҙам итешә. Ишмырҙа кантон Ҡыраубикәне хәйләләп тә, ҡурҡытып та улының ҡайҙа икәнен таптырғанда, ул үҙен ҡыйыу тота, бер

һүҙ әйтмәй. Килене менән ейәнсәре Таңсулпан да уның һүҙенән сыҡмай.

Ҡараголдоң ҡыҙы **Таңсулпан** — Һөйөндөк батырҙың яратып йөрөгән ҡыҙы. Уларҙың үҙ-ара мөхәббәттәре, киләсәктәре халыҡ яҙмышы менән тығыҙ бәйләнгән. Атаһының, Һөйөндөгөнөң ирек яулар эштәре уңһа ғына улар бәхетле буласаҡ. Ләкин уларға гәзелһеҙ йәмгиәттә бәхет көтөүе ҡыйын.

Пьесала **Вася** менән **Наташа** һәм **Кузьма** образдары ҙур ғына роль уйнай. Вася менән Наташа — баяр Иван Ивановичтың крепостнойҙары. Уларҙың тормоштары ирекһеҙ һәм йәберле булған кеүек, ғаилә ҡороп бәхетле була алырҙарына ла өмөт юҡ. Шуға крепостной яҙмыштарына ҡаршы баш күтәрергә мәжбүр улар.

Вася, Наташа һәм Кузьма кеүек крепостной кешеләрҙең үҙ хужаларына, крепостнойлыҡҡа ҡаршы башҡорт крәҫтиәндәре Ҡараголдар, Ҡәҙершалар менән бергәләп яу ҡуптарыуҙары уртаҡ ауыр яҙмышты, синфи ерлектә тыуған берҙәмлекте һәм берҙәй маҡсаттарҙы сағылдыра.

**Кире образдар.** Драмала һүрәтләнгән отставкалағы генерал Красиков баяр, батюшка Андрей, Ишмырҙа кантон һәм уның ярҙамсыһы Әпкәләй — тамашасыла нәфрәт уятырлыҡ кире образдар.

**Баяр Иван Иванович Красиков** йөҙөндә Дауыт Юлтый урыҫ колонизаторҙарының башҡорт ерҙәренә килеп, ерҙәрен тартып алып, үҙҙәрен хеҙмәтселәр итеп яллап, мыҫҡыллйәбер күрһәтеп байыған ҡомһоҙ һәм мәрхәмәтһеҙ бер вәкилен кәүҙәләндергән. Баяр әле биләгән ерҙәренә генә ҡәнәғәтләнмәй, алдау-йолдау юлдары менән башҡорттарҙың тағы яҡшыраҡ ерҙәрен эләктерергә йөрөй, был мәкерендә башҡорт түрәләре ярҙамына таяна. Иван Иванович Красиков колонизатор ғына түгел, үҙендә крепостной крәҫтиәндәр тотҡан крепостник та.

Шуныһы ла ғибрәтле, Иван Иванович Туҡ буйы яҡтарына килеп урынлашҡан Красиков баярҙар тоҡомоноң бер прототибы, ысынбарлыҡтағы шәхес. Дауыт Юлтыйҙар үҙҙәре лә революцияға тиклем ана шул Красиков баярҙарға ялланып эшләп йөрөгәндәр. Уларҙың башҡорт ерҙәренә йәйгән тамырҙарын 1917 йылғы революция ғына киҫә алғайны.

**Поп Андрей** ҙа Красиков баярҙың бер һыңары. Ул да колонизатор зат. Рәсәй батшалығы тарафынан үткәрелгән сәйәсәте генә икенсерәк. Батюшка Андрей Башҡортостанға килеп миссионерлыҡ эшен башҡара — башҡорттарҙы суҡындырып мосолмандан православие диненә күсермәксе. Шулай итеп, халыҡтың ерһыуын талап алып ҡына түгел, уның динен алыштырып та выждан иркен, рухын быумаҡсылар улар. Батюшка Андрей за башҡорт ерҙәренә бик ҡыҙыға, бар уй-ниәте — ниндәйҙер әмәл менән мул ғына ер эләктереп байып, крепостник булып китеү. Уның поплыҡ кейеме, дин әһеле булып ҡыланыуы бер бөркәнсек кенә, уның ҡара хөлләһе эсендә ҡомһоҙ һәм нәфселе әҙәмдең ҡара йөрәге тибә.

Урыҫ колонизаторҙарының һәм миссионерҙарының Башҡортостандағы бер таянысы — башҡорттарҙың **Ишмырҙа кантон** кеүек «үҙ түрәләре», әлбиттә. Шундай таяныстары һәм һатлыҡ йәндәр булмаһа, улар, бәлки, бик ҡоторона ла алмаҫтар ине.

Башҡорт кантондары хаҡында байтаҡ ҡына классик йырҙар ҡал-

ган. Уларҙың береһендә, хәтерегеҙҙә булһа, былай тиелә:

*Кантон да ғына кантон килә, тиҙәр,*
*Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ,*
*Яуыз кантондарҙы ҡуя икән*
*Рәсәй генә тигән батшалыҡ.*

Драмала бирелгән Ишмырҙа кантон ана шул «Рәсәй генә тигән батшалыҡ» тарафынан ҡуйылған һәм халыҡтың тормош-көнкүрешен ҡаҡшатҡан ҙур түрәләрҙең береһе инде.

Ишмырҙа — дәрәжә ярата торған ҡанһыҙ бер түрә. Дәрәжәһен күтәрер йә иһә берәй миҙал эләктерер өсөн ярамһаҡланып ул Иван Иванович баярға тағы яңы ерҙәр бүлеп бирә, улар алдында төрлөсә ҡуштанлана.

Ишмырҙа кантон — рәхимһеҙлектең, тупаҫлыҡтың сигенә сыҡҡан ауыһыҙ әҙәм, өҫтәүенә. Ул, юҡ-бар сәбәп табып, халыҡты ҡамсы менән һуҡтырырға ярата, мыҫҡыллай; йәберләү тигәндә — уға ҡуш. Тупаҫ һәм холоҡһоҙ был кантонға Әпкәләй һымаҡ ҡуштандары иш.

**Әпкәләй** — түрәләр алдында ялағайланып, ҡуштанланып йөрөгән хөсөтсө һәм төптө маҡтансыҡ бер бәндә. Ул да шул халыҡ иҫәбенә байыу өсөн намыҫын һатҡан, хатта кешелек сифаттарын юғалта барған бер әшәке тип. Уның шымсылығы ла бөтә ҡылыҡ-ҡиәфәтенән айырылғыһыҙ. Драмалағы ярлы Мозой һүҙҙәре менән әйткәндә, Әпкәләй — ул ошаҡ ташып, баяр тупһаһында теҙ сүгеп, тамаҡ туйҙырыусы һатлыҡ йән. Ул — мәкерле рәүештә Ҡараголдо йәшеренеп сәнсеп үлтергән йәнҡыяр.

Әпкәләй образы хәҙер халыҡ теленә ялағайлыҡты, хыянатсылыҡты аңлатыр *әпкәләй* һүҙе булып инеп китте.



**Пьесаның драматик эшләнеше.** Биш шаршауҙан торған «Ҡарағол» пьесаһының жанрын Юлтый «тарихи трагедия» тип исемләгән. Халыҡтың михнәтле көнкүреше, Ҡараголдоң Әпкәләй тарафынан үлтерелеүе әҫәрҙе трагедия тип атарға нигеҙ бирһә лә, уны, әлбиттә, бөтөнләй трагизм менән һуғарылған пьеса тип булмай. Сөнки бында халыҡ пассив, меҫкен масса түгел, бәлки үҙенең батыр улдары менән бергә баярҙарға, ҙур түрәләргә ҡаршы баш күтәреүсе оло көс. Пьесаның трагик рухы халыҡтың күпме ҡан түкһә лә, элек күпме ихтилал күтәреп ҡараһа ла көткән азатлығын яулап ала алмауҙа, үҙ дәүләтен төҙөргә көсө етмәүҙә.

«Ҡарағол» пьесаһы, авторҙың тәүге сәхнә әҫәре булыуға ҡарамаҫтан, драматургия яғынан матур эшләнгән. Дөрөҫөрәге, Юлтый был пьесаһын сәхнәгә ҡат-ҡат ҡуйыу барышында художество йәһәттә камиллаштыра, шымарта килгән. Пьеса биш шаршауҙан торһа ла, ул сюжет, композиция яғынан шаҡтай йыйнаҡ һәм бер бөтөн. Был ҡыҫҡа шаршауҙар Ҡараголдар йәйләүе һәм баяр йорт-хужалығы тамашалары тирәһендә тупланып, драматик хәрәкәтте тиҙләтә, хәл-ваҡиғаларҙың тығыҙлығын тәьмин итә.

Ҡарағол, Ишмырҙа, Әпкәләй образдары психологик яҡтан матур тасуирлана. Ҡыҫҡа һәм үткер диалогтар, психологик көсөргәнешле монологтар, тапҡыр-тапҡыр репликалар, күп тауышлылыҡ авторҙың драматургик оҫталығы хаҡында һөйләй. Айырыуса Ҡарағол менән Васяның монологтары уларҙың характерын, уй-тойғоларын тулы асырға хеҙмәт итә.

Драматург һәр бер персонажының холоҡ-ҡылығына килешле телмәр

(һөйләү) үҙенсәлектәрен табырға тырыша. Әйтәйек, Ҡараголдоң һүҙе асыҡ һәм тәүәккәл икән, был уның темпераментына бик йәтешле. Әпкәләйҙең һәр бер һүҙендә мин-минлек, ялагайланыу, алдашыу гәләмәттәре тулып ята. Тупаҫ Ишмырҙа кантондың асыулы, ҡысҡырыусан теле менән Иван Ивановичтың ҡурҡаҡ һәм тел йыугыс икәнен һис кенә лә бутау мөмкин түгел. Халыҡтың зирәклеген, һүҙгә тапҡырлыгын йыйған Ҡыраубикә ҡарсыҡтың теле әйтемдәр, үткер фразалар менән биҙәлгән. Йәгни һәр персонаждың характерына ҡарай үҙ теле, үҙ һүҙе.

Пьесаның сюжет һыҙыгына этнография, көнкүреш, йола, йыр-музыка элементтары бик тәбиғи үрелеп китә, уны йәнләндереп һәм йәмләп ебәрә. Айырым сәхнәләрҙә ҡурай моңо оҙата бара. Ошо яҡтан «Ҡарагол» пьесаһы, артабан башҡорт драматургияһына хас булыр матур көнкүреш, йола тамашаларына, йыр-музыка сифаттарына ла эйә.

**Спектаклдең уңышы.** «Ҡарагол» пьесаһы буйынса ҡуйылган спектаклдәр, айырыуса Башҡорт дәүләт театры спектаклдәре, тамашасыларҙың ихтирамын яулап, һәр саҡ ҙур алҡыштар менән үтте. Егерменсе йылдарҙа Башҡорт күсмә театры менән Башҡортостан районларына, Туҡсоран кантонының үҙенә гастролдәргә сыҡҡас, «Ҡарагол» ысын мәгәнәһендә халыҡсан сәхнә әҫәрене әүерелде. Рухи аҙыҡҡа һыуһаган һәм театраль уйынға мәйел халыҡ тәүҙә башҡорт күсмә театрын һәм уның сәхнә әҫәрҙәрен сәнгәт күренеше генә түгел, гүйә, ысын тормоштоң үҙе кеүек ҡабул итте.

Был йәһәттән бер артистың шундай хәтирәһе бик ҡыҙыҡлы: «Беҙ 1925 йыл Мәсәгүт кантонының бер ауылында «Ҡарагол» спектаклен ҡуйҙыҡ та иртәһендә икенсе ауылга киттек, — тип яҙа ул. — Бер тау үрләгәндә аттан төштөк тә йәйәү барабыҙ. Ылаусы агай тәртә янынан гына башын эйеп уйга батып бара, ҡайһы ваҡыт яурынын һикертеп: «Һи... һи... бына һин әле!..» — тип йөҙөнә бер аптырау гәләмәте тыуҙыра. Шулай оҙаҡ баргас әкрен генә: «Йә, агай, нимә тураһында уйлап бараһың?» — тинем. Ул әйләнеп ҡараны ла уңайһыҙға ҡалган бер төҫ менән: «Бына әле, ҡустым, шуны уйлап барам: кисәге теге һеҙҙең уйыныгыҙҙы әйтәм. Унда бит Ишмырҙа кантон аты дулаган өсөн генә ылаусыга илле ҡамсы һугырга әмер бирҙе. Әгәр ҙә аты ҡаты дулап китеп кантонды ҡолатһа, нишләтер ине икән?» — ти. Кантондың ҡылыгына һис бер мәгәнә бирә алмай аптырап бара. Ул Ишмырҙа кантондан шул тиклем әҫәрләнгән ки, ул аны уйын итеп кенә ҡарамай, бәлки шуны ысын тормош иттереп, үҙенең күҙе алдында көүҙәләндерә икән...»

Тагы бер миҫал: «Ҡарагол» спектакле бара. Унда Әпкәләй тигән бер тип бар. Ул Ишмырҙа кантон һәм байҙар ягынан шымсы булып, башҡорт хәрәкәтен быуып, һатып йөрөй. Аҙаҡҡы пәрҙәлә Ҡараголдо сәнсеп үлтерә лә өҫтәл артына ҡаса. Шул ваҡыт тамашасы халыҡ: «Ана, ана өҫтәл артына ҡасты, өҫтәл артына ҡасты!.. Тотогоҙ, ебәрмәгеҙ!..» — тип аяҡ өҫтө тороп, тулҡынланып шаулаша башлай. Уйын буйынса, уны Вася тотоп, муйынынан быуып алып сыга. Шул ваҡыт тамашасылар араһынан берәүҙәр ҡулдарына ниҙер алып: «Ҡайҙа уны беҙҙең ҡулга бирегеҙ! Үҙебеҙ күрәген бирәйек. Етәр инде ул Әпкәләйҙәргә! Донъяны күп ҡоротто-

лар улар...» — тип сәхнә артына киләләр. Әпкәләй ролендә уйнаусы артисты ҡайһы ваҡытта йәшереп алып ҡалырға тура килгеләнә».

Бындай фактар хәҙерге көндә сәйерерәк күренһәләр ҙә, ул заман өсөн тәбиғи булып, театрҙың, пьесаның халыҡҡа ни тиклем тәьҫирле булыуы хаҡында һөйләмәйҙәрме ни?!

Башҡорт сәхнә сәнғәтенең һәм драматургияһының йылдан-йыл күтәрелә килеүе менән «Ҡарагол» спектакле лә тамашасы алдында ҙурыраҡ дан яулай барҙы, тиҙҙән ул республика күләмендә генә түгел, ә бөтә союз тамашасыһының ихтирамын ҡаҙанды. Башҡорт театрының 1930 йылда Мәскәүҙә булган гастролендә «Ҡарағол» талапсан баш ҡала тамашасыһы һәм театраль тәнҡит тарафынан юғары баһа алды. Был спектаклдең төп ролдәрендә уйнаған Ғималетдин Минһажев, Ғәлимйән Ҡарамышев, Таңһылыу Рәшитова, Зәйтүнә Бикбулатова кеүек актерҙар үҙҙәренең сәхнә оҫталыҡтарын таныттылар һәм *атҡаҙанған* йә *халыҡ артистары* исемен алдылар.

Башҡорт дәүләт драма театрының ун биш йыллыҡ байрамы көндәрендә (1935 йыл) «Ҡарагол» спектакле сәхнәлә 300 тапҡырҙан да артығыраҡ уйналып, театр репертуарының төп хазинаһы, ә башҡорт драматургияһының классикаһы дәрәжәһенә күтәрелгәйне.

«Ҡарағол» пьесаһы менән башҡорт драматургияһының тарихи-көнкүреш тематикалы гүзәл традицияһы барлыҡҡа килде. Баязит Бикбай менән Ғәлимов Сәләмдең «Салауат», Баязит Бикбайҙың «Ҡарлуғас», Ҡадир Даяндың «Таңсулпан» кеүек пьесалары ошо ерлектә ижад ителгән уңышлы әҫәрҙәр булды.



Хәҙерге заманда ла «Ҡарагол» спектакле, Башҡорт академия драма театры тарафынан яңыртып ҡуйылып, яңы уңыш ҡаҙанды.

**Юлтыйҙың проза әҫәрҙәре.** Дауыт Юлтый — проза жанрында ла танылған яҙыусы. Проза әҫәрҙәре яҙыу менән мауығыуы уның йәш сағынан уҡ килә. Үҙенең иҫтәлектәренә ҡарағанда, Юлтый башта ҡәләмен кескәй жанрҙарҙа һынап тормай, тура ҙур күләмле әҫәргә — романға тотона.

1913 йылдың йәйендә ҡаҙаҡ далаларына балалар уҡытырға киткәндә: «Аҡтүбәгә барғас, китап лавкаһынан Ғәлимйән Ибраһимовтың «Йәш йөрәктәр»ен һатып алдым. Мин был көнгә тиклем татар әҙәбиәтендә шундай ҙур роман күргәнем юҡ ине. Ҡаҙаҡ араһына барғас, мин ул «Йәш йөрәктәр»ҙе бер нисә тапҡыр уҡып сыҡтым. Ул роман миңә шул тиклем ҙур йоғонто яһаны ки, миндә шундай бер ҙур роман яҙыу теләге тыуҙы һәм «Томан аҫтында» тигән бер роман яҙырға башланым, — тип яҙа Дауыт Юлтый. — Ул роман минең үҙемдең тәржемәи хәлгә (биографияға) бәйләнеп, ауылдағы ярлы крәҫтиәндәр тормошон тасуир итеүҙән тора ине. Ике ай эсендә ике йөҙ биттәр самаһы романды яҙып бөттөм».

Көҙөн тыуған яғына кире ҡайтҡанда, тимер юлында арҡалағы ҡапсығы менән бергә роман ҡулъяҙмаһын да урлатып, уның тәүге ҙур әҫәре шулай юғала. «Томан аҫтында» тигән романы сюжетына ул кире 30-сы йылдарҙа ғына әйләнеп ҡайта.

Революцияға тиклем яҙған ваҡ хикәйәләре, нәҫерҙәре ҡулъяҙмалар көйө ҡала. Уларҙың ҡайһыларын 20-се йылдарҙа ғына баҫтырыуға өлгәшә.

Шулар араһында 1919 йылда яҙған «Бәләкәй Ҡотош» хикәйәһе айырылып тора. Унда эшселәрҙең элекке ауыр тормошон, революцион көрәштә нисек ҡатнашыуҙарын типография эшсеһе улы бәләкәй Ҡотоштоң яҙмышына бәйле мауыҡтыргыс сюжет аша матур ғына хикәйәләп бирә.

Егерменсе йылдар уртаһынан инде Дауыт Юлтыйҙың прозаһы реалистик йүнәлештә ныҡлы баҙыҡлана бара. «Тимеркәй фәлсәфәһе» (1924), «Хәлкәй артист» (1926), «Өмәт» (1926) хикәйәләре, «Әлимә йәки Мырҙаш ҡарт туйы» (1929) повесы — сәсмә әҫәрҙәренең иң яҡшы өлгөләре. Был әҫәрҙәрендә Юлтый үткән менән хәҙерге, шәхес һәм коллектив, кеше яҙмышы мәсьәләләрен социаль һәм әхлаҡи планда оҫта сағылдыра.

«Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәһе — кеше яҙмышы мәсьәләһен социаль-фәлсәфәүи үткерлек менән асып һалған әҫәр. Хикәйәлә, бер яҡтан, Тимеркәй, икенсе яҡтан, Ҡотлояр бай, Балтабикә ҡарсыҡ кеүек образдар аша капитализм йәмгиәтендәге өҫтән һәм түбән социаль ҡатламдар ҡапма-ҡаршы ҡуйып һүрәтләнә, конкрет хәл-ваҡиғалар аша уларҙың тулайым характерҙары тасуирлана. Сәми, Тимеркәй ише тормош төбөнә ташланған әҙәмдәрҙең фажиғәле яҙмышы ныҡ тетрәндерә һәм донъя, яҙмыш хаҡында тәрән уйланырға мәжбүр итә.

«Хәлкәй артист» хикәйәһендә яҙыусы капиталистик йәмгиәттең икенсе бер тибын, тормоштоң түбән ҡатламынан сығып, «юғарыраҡ публика араһына инергә тырыша торған зыялы кешеләрҙән» иҫке интеллигенция вәкилен көләүҙәләндерә. Хәлкәй, йәшләй етем ҡалып, шулай уҡ ҡағыла-һуғыла үҫкән. Ләкин ул, Тимеркәй шикелле, яҙмыш ҡолона әүерелеп баш эйергә теләмәй, иҫке тормош сырмалсыҡтарынан ысҡыныр өсөн сәбәләнә, әрһеҙләшә. Сәбәләнеүе иҫкегә яйлашыу гәләмәте. Хәлкәй артистың хыялы ваҡ буржуаз иллюзиялар менән сикләнгән: бер аҙ тормошон йүнәтеп алыу, әҙәм рәтле йәшәү.

«Тимер юлда» исемле юлъяҙмаһында, бигерәк тә «Өмәт» хикәйәһендә инде, Юлтый кешеләр тормошона, йәмғиәткә социалистик революция алып килгән яңылыҡтарҙы, яңы кешеләрҙе — коммунист етәкселәрҙе, комсомол йәштәрҙе һәм 20-се йылдарҙың эшмәкәр әҙәмдәрен күрһәтергә теләй.

«Өмәт» хикәйәһендә яҙыусы шул заман кешеһенең үрнәк алырлыҡ образын һүрәтләүҙе маҡсат итә. Өмәт — ысынлап та, заман геройы. Ул граждандар һуғышында батырлыҡтар күрһәткән, һуғыштан ҡайтҡас, производствола эшләгән, ғәскәри операцияларҙа тәжрибә туплаған. Эш, көрәш ҡосағында тасуирлау Өмәт образын шаҡтай йәнле иткән. Уның яңы дәүер кешеләренә хас яҡшы сифаттарын — эшсәнлеген, ойошторусылыҡ һәләтен, ихтыяр көсөн төрлө ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыуында ла, крәҫтиәндәр менән аҡыллы эңгәмәләрендә лә күрергә мөмкин.

Дауыт Юлтый хикәйәләре композицион төҙөклөгө, бер генә сюжетҡа ҡоролған булыуы, геройҙарҙың тормош юлын йыйнаҡ ҡына хикәйәләп биреп, характерын ниндәйҙер бер эпизодта асыҡ итеп һүрәтләй белеүе менән айырылып торалар. Ул ҡыҫҡа хикәйәләренә лә бай тормош материалын һыйҙыра белә; теле матур, стиле шыма.



Д. Юлтый ҡәләмдәштәре менән «Ҡан» романының беренсе китабын тикшерә. *1934 йыл*

Юлтый 20-се йылдар аҙағында «Әлимә йәки Мырҙаш ҡарт туйы» тигән повесын тамамлай. Ләкин ул шул замандарҙа донъя күрмәй ҡала. Уның ҡулъяҙмаһы, аҙаҡтан ғына табылып, 1963 йылда «Ағиҙел» журналында баҫылып сыға.

Автор был повесында Әлимә образы аша революцияға тиклемге башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының яҙмышын сағылдыра. Ләкин Әлимә, М. Ғафуриҙың «Ҡара йөҙҙәр» повесындағы Ғәлимә кеүек, үткән замандың «миллион ҡорбандарының береһе» түгел: ул тырышлығы менән үҙ алдына белем алып, мөғәллимә була. Иҙелгән, ҡыйырһытылған башҡорт балаларына белем бирергә тырыша, дин әһелдәренең, фанатиктарының төрлө ҡараштарын еңеп, халыҡҡа аң-белем, мәғрифәт нуры таратыу эшенә бар көсөн сарыф итә. Яҙыусы Әлимәне үҙ шәхси иркен, ҡатын-ҡыҙҙар хоҡуғын яҡлап көрәшкә сыҡҡан, ҡараңғылыҡ хөкөм һөргән донъяла яҡты нур булып балҡырҙай шәхес итеп кәүҙәләндерә.

Утыҙынсы йылдарҙа Юлтый күберәк үҙ замандаштары тураһында хикәйәләр, очерктар, юлъяҙмалар яҙыуын дауам итә.

**«Ҡан» романы.** Утыҙынсы йылдарҙа Дауыт Юлтый, нигеҙҙә, тарихи-революцион тематикаға арналған ҙур күләмле проза әҫәрҙәре өҫтөндә эшләнә. 1933 йылда ул «Ҡан» исемле романының беренсе китабын яҙып

бөттө, өс йылдан уның икенсе китабын тамамланы. Ошоларҙы ҡушып трилогия ижад итергә уйланы. Баймаҡ заводы хаҡында документаль ҙур әҫәр яҙыр өсөн материал туплай башланы.

**Романдың яҙылыу тарихы**. Дауыт Юлтый 30-сы йылдар башында ҙур ижади пландар менән ҡанатланып, өс романдан торор трилогия тигән оло эпик әҫәр яҙыу менән мәшғүл ине. Әле 1928 йылды «Башҡортостан» гәзитенә биргән анкетаһында ул: «Төпкөл урында» тигән өс бүлекле ҙур роман яҙырға башлағанмын, — тигәйне. — Беренсе бүлеге — башҡорт ауылы, икенсе бүлеге — империализм һуғышы, өсөнсө бүлеге — революция дәүерен үҙ эсенә ала». Ә утыҙынсы йылдарға ингәндә биргән бер рапортында граждандар һуғышы тарихынан роман яҙып ятҡанлығын хәбәр итә.

Тимәк, Дауыт Юлтыйҙың был әҫәрҙәре XX быуат башындағы мөһим тарихи-революцион ваҡиғаларҙы үҙ эсенә ала торған ҙур бер трилогия формаһында уйланған һәм ижад ителә башланған була.

Был трилогияның беренсе һәм өсөнсө бүлектәре фәҡәт башланып ҡына ҡуйыла. Беренсе бүлек (йәки беренсе китап) революцияға тиклем ҡаҙаҡтар араһында булған сағында яҙып та юлда ҡулъяҙмаһын юғалтҡан романы сюжеты буласағын тоҫмалларға мөмкин. Автор аҙаҡ үҙе үк быны асыҡлап әйтә: «Томан аҫтында» романының төп маузуғын (йөкмәткеһен) ошо көндә яҙып ятҡан трилогиямдың беренсе китабында бирәсәкмен», — ти 1934 йылда.

Ләкин утыҙынсы йылдар уртаһына табан халыҡ-ара хәлдәрҙең ҡырҡыулашыуы, фашистарҙың Германияла власҡа килеп, яңы һуғыш ҡурҡынысы тыуыуы сәбәпле булһа кәрәк, Юлтый трилогияһының беренсе китабын яҙыуҙы ҡуйып тороп, икенсе китабы буйынса эшләй башлай. Өҫтәүенә ул саҡтарҙа империалистик һәм граждандар һуғышы тарихтарын яҙыу буйынса махсус ҡарарҙар ҙа сыҡҡан була.

Ошо бурыстарҙы күҙ уңында тотоп, Юлтый ҙур әҫәренең икенсе китабын, йәғни аҙаҡтан «Ҡан» тип исемләнгән романын, яҙырға ултыра.

**Романдың проблематикаһы**. «Ҡан» 1914—1918 йылдарҙа булған Беренсе донъя һуғышы тураһындағы роман. Яҙыусы был күп илдәр ҡатнашҡан донъя һуғышының империалистик асылын һәм кешелеккә килтергән фажиғәләрен бөтә ысынбарлығы менән асып биреүҙе һәм һуғышҡа ҡаршы көрәш, сикһеҙ нәфрәт тәрбиәләүҙе маҡсат итә. Һуғышҡа бәйләп ул шундай проблемаларҙы хәл итеүҙе ҡуя: һалдат массаларының нисек пассив ҡарнылыҡтан актив революцион көрәшкә күтәрелә барыуҙары, фронтта ла, тылда ла революцион хәл-ваҡиғаларҙың ҡуйырыуы, империалистик һуғышты граждандар һуғышына әйләндереп ебәреү юлдары, килешеү, тыныслыҡ өсөн көрәш мәсьәләләре.

Империалистик һуғыштың башынан аҙағына саҡлы тиерлек үҙе фронтта булған Дауыт Юлтый был проблемаларҙы фронт һәм окоп тормошоноң, ҡанлы яу эсенең иң ауыр шарттарында һалдат яҙмыштары аша асып һала. Был яҡтан әҫәр бер ни тиклем яу йылдары иҫтәлегенә лә оҡшай төшә.

«Ҡан» романының тәүге биттәренән үк — һалдат тормошоноң яфаһын, фронт ваҡиғаларын һүрәтләй

башлагандан уҡ — һуғыштың афәт икәнен күрһәтергә ынтылыш асыҡ һиҙелә. Бына фронтҡа инер һалдат күргән һәм йөрәге өшөп тойған тәүге тамашалар: «Һәләкәтле көстәр менән снарядтар бер-бер артлы ярылалар, төрлө урындарҙа ярылган снарядтарҙың көстәренә ерҙәр бәүеләләр, ыңғырашалар. Гүйә, беҙ сикһеҙ, төпһөҙ диңгеҙ өҫтөндә ваҡ, бик ваҡ юнышҡылар кеүек йөҙәбеҙ йәки көслө дауылдарҙа осҡан ҡамгаҡтар кеүек күтәрелеп барабыҙ, йәки тәрән һыу төбөнә, ҡараңғылыҡҡа төшкән ваҡ ҡомдар кеүек төпкә, тәрәнгә ҡойолабыҙ, бер хәрәкәт, бер нәмә, бер үлән беҙҙең ихтыярҙа түгел». Йәки: «Йөҙҙәрсә саҡрымдар буйынса утлы телдәрен һауаға һуҙып, ауылдар яналар. Уларҙың ҡыҙыллыҡтары күккә күтәрелеп, ут диңгеҙе кеүек тулҡынланып торалар. Улар араһынан күтәрелгән ракеталар, прожектор нурҙары, төндә туп атылганда ялҡынланып күренгән уттар, ул төнгә пожарҙар араһында барган фажигәле күренештәрҙе тагы ла көсәйтәләр, тагы ла шомландыралар, гүйә, бөтә донъяны яндырырга, көйҙерергә, көл итергә килгән, унан һис бер йән эйәһе ҡотолорга мөмкин булмаган янгын кеүек күңелдәргә дәһшәт һалалар».

Ана шундай яу ҡырында көн-төн күпме әҙәм гүмере оҙөлә, донъяла күпме гәрип, етем арта, хужалыҡ ҡыйрала. Романда һуғыштың шундай бөтә дәһшәте — ҡыйралыш, ут-ялҡын, үлем, ҡан, күҙ йәштәре, аһ-ыңғыраш аҙым һайын осрап тора.

Ләкин һугыштың ҡот осҡос шундай күренештәрен, ҡырағайлыгын һүрәтләгәндә автор күргән-белгәнен яҙыу менән генә сикләнмәй, әлбиттә. Ул үҙ башынан кисергәндәрен яңынан иҫкә төшөрөп йәки һалдаттар исеменән быларга үҙенсә хөкөм сығара, һуғыштың килеп сығыуы, ни өсөн барыуы, кемдәргә үлем, кемдәргә байлыҡ килтереүе хаҡындагы тәрән уйланыуҙарга, социональ-сәйәси һығымталарга килә.

Тәнҡитселәр «Ҡан» романын немец яҙыусыһы Э. Ремарктың «Көнбайыш фронтта үҙгәреш юҡ» (1928) романы менән сагыштыралар. Мәҫәлән, яҙыусы Иван Недолин: «Бәлки Ремарк «Ҡан» романының авторына бер ни хәтле шауҡым да яһагандыр. Ләкин был айырым сюжет элементтарына, айырым баталь, фронт күренештәренә генә ҡагылышлы. Әммә Юлтый фронтҡа икенсе күҙлектән, Ремаркта булмаган яңы позициянан ҡарай», — тип яҙҙы. Ул яңы позиция асылда һугышты рәхимһеҙ хөкөм итеүгә, уның империалистик асылын асып һалыуға ҡайтып ҡала. Ғөмүмән, донъяла ҡыйралыш, һәләкәт тыуҙырган, кешеләрҙең гүмерҙәрен өҙгән, тормоштарын боҙган һугыш ҡәһәрләнергә һәм мәңгегә бөтөрөлөргә тейеш, тигән идеялар үтә әҫәрҙән.

**Һалдат образдары.** Һалдаттарҙың һуғышҡа ҡаршы пассив ҡаршылыҡтарының нисек революцион көрәшкәсә үҫешен Дауыт Юлтый романының төп геройҙары Булат, Новиков, Индрил, Байғужа кеүек ҡораллы һалдат образдары аша әҙмәәҙлекле итеп яҡтырта.

Бына автобиографик характерҙагы Булат образы. Романдагы бөтә ваҡигалар уның исеменән һөйләтелә. Булат образы, уның һөйләгәндәре аша автор асылда үҙе фронтта күргән-белгәндәрен тасуир итә, ул хәлваҡигаларҙың, һалдаттар яҙмышының иң әһәмиәтле тигәндәрен генә һайлап алып художестволы дөйөмләштерә.

**Булат** — ярлы крәҫтиән гаиләһенән сыҡҡан егет. Ике агаһы менән бер осорҙа шинель кейгән Булат батша армияһы режимының бөтә ыҙаһын, ҡанһыҙ офиҫерҙарҙың йәбер-золомон кисерһә лә, башта ауыҙ асмаҫ йыуаш һалдат әле. Фронтҡа килен кергәндә лә ул ни өсөн һуғышҡа тарттырылыуын, уның кемдәр өсөн алып барылғанын, гөмүмән, һис нәмәнең аңын-тоңон айырып бөтмәй. Окоп тормошоноң тәүге айҙарында ул үҙ яҙмышын ҡәһәрләүҙән, ғажизлыҡтан әллә ни уҙа алмай.

Яҙыусы артабан Булатты фронттың үлемесле яфа-фажиғәләрен кисереү, Новиков кеүек ҡыйыу һалдаттарҙың үткер фекерҙәренә ҡолаҡ һалыу, тыл яны халыҡтарының һәм һалдат массаһының һугышҡа протесын үҙ күҙҙәре менән күреү, төрлө аһ-зарҙарҙы, ҡәһәрҙәрҙе үҙ ҡолаҡтары менән ишетеү аша уҙгарып, унда революҫион аң үҫешен бик ентекле хикәйәләүгә өлгәшә. Булат ул революцион ҡараштарга теләктәшлек белдереп кенә ҡалмай, тора-бара ошо ҡараштарҙы үҙе һалдаттар араһында, тылдагы халыҡ араһында үткәреүсе ҡыйыу көрәшсегә әйләнә.

Эшселәр араһынан сыҡҡан Новиков баштан уҡ шаҡтай алдынгы ҡарашлы һалдат. Әммә был образдың да үҙенсә тәбиғи үҫеш логикаһы бар.

**Новиков** — холҡо менән ҡыҙыу ҡанлыраҡ, тура һәм әсе теллерәк кеше. Ул башта һуғыштан ризаһыҙлыгын дөйөм рәүештә йәки ярым шаярыу, асыу рәүешендә генә белдерһә, үҙ ротаһындагы һалдаттарҙың тын алыштарын яҡшыраҡ белгәс, үҙ фекерҙәрен асыгыраҡ һәм төбәберәк әйтеүгә күсә. Мәҫәлән, «Һин мир тигән булаһың, Байгужа, — ти ул тиҙҙән тыныслыҡ булыр тигән өмөттәге һалдатҡа. — Беҙгә мирынан да, һугышынан да файҙа юҡ. Беҙгә мир, ана күргәнең бар бит туғандар ҡәберен — шунда. Унда күмелһәк, ярай әле. Беҙ бына ошонда, окоптар аҫтында хәбәрһеҙ-ниһеҙ күмелеп ҡалырбыҙ әле. Әҙме ни беҙҙең браттар күмеләләр? Хәйер, барыбер инде. Шулай ул, һуғыш та, мир ҙа беҙҙең өсөн түгел. Уларҙың барыһы ла генералдар, байҙар осөн... Беҙгә ни? Беҙҙең бер табан еребеҙ юҡ. Бөгөн бында, иртәгә унда... Беҙ бит ябай үлем кешеләре, пушка ҡорбандары!..» Новиков ана шулай иң киҫкен һәм иң кәрәкле мәлдәрҙә һалдат нәфрәтенә яңы ҡуҙ һалырға һәм шуға билдәле бер йүнәлеш бирергә тырыша. Ҡыйыу фекерҙәре һәм туралыгы менән һалдаттар араһында уның абруйы ла юғары. Тиҙҙән ул фекерҙәш окопташтарын туплап алғас, һалдаттар араһында ғына түгел, фронт тирәһендәге крәҫтиәндәр араһында ла һугышҡа ҡаршы агитацияны оҫта ойоштороп ебәрә.

**Индрил** образы — революҫион аңы менән бик үҙенсәлекле соҫиаль тип. Ул холҡо менән Новиковтың киреһе — һалҡын ҡанлы сабыр кеше. Ул күп ваҡыт үҙен кешеләрҙән ситтәрәк тота, йомоғораҡ, йыш ҡына уй-хыялга бирелергә ярата. Әммә кәйефе килгән сагында иптәштәре менән ихлас һөйләшергә, хыялдары менән уртаҡлашырга, һәр ваҡыт ярҙам ҡулы һуҙырга әҙер торган һалдат ул.

Һугышҡа тиклем Индрил Петербургта электр заводында эшләгән, шунда алдынғы ҡараштары формалаша башлаған. Ул халыҡтың бөйөк көсөн яҡшы тоя, шуны матур тормош төҙөүгә йүнәлтеү хаҡында хыяллана. Ләкин күберәк фәлсәфәгә бирелеп китеүе арҡаһындамы — шуларҙы нисек гәмәлгә ашырыуҙың

конкрет юлдарын һәм сараларын таба алмай йөҙәй. Һуғыштан ялҡҡан Индрил, һалдат формаһын ташлап, йәшеренеп йәшәргә, подполье көрәшенә күсергә тигән уйҙарҙа сыуала.

Революцион эшселәр менән осрашыу, улар демонстрацияһының уңышлы үтеүенә ярҙам итеү Индрилдың фәлсәфәһенә асыҡлыҡ индерә, ул эшсе-пролетариатта топ көстө күрә.

«Кешелекте һәләк итә торған техниканы үҙ файҙаһына буйһондороу пролетариат ҡулында икән. Мин хәҙер ул аҡылды таптым. Хәҙер пролетариат менән ботә ер шарының күсәрен әйләндерергә момкин һәм әйләндерәсәк тә», — ти ул аҙағыраҡ, пролетариатҡа бөтә өмөтөн бағлап.

Булаттың ауылдашы һәм окопташы Байғужа образында иһә һалдат массалары араһында һуғышҡа протестың тағы бер яңы асыҡ сағыла. **Байғужа** — ауыл батрағы. Ул ҡарап тороуға ауыр тәбиғәтле кеше күренһә лә, бик хәстәрлекле, йыйнаҡ һәм тоғро юлдаш. Байғужа һуғышҡа ҡарата, уны килтереп сығарыусылар һәм һалдат баштарын ашаусылар батша, түрәләр һәм офицерҙар тип ҡарап, ошоларҙы берәмләп юҡ итеү фекерендә. Ул үҙе урманда бер саҡ яман ике унтер офицерҙы үлтереп ташлай, хатта нисек итеп батшаны үлтереү хаҡында хыялланып йөрөй. Ләкин былдай террор юлы менән генә һуғышты туҡтатып булмаҫын, буш дыуамаллығын тиҙ төшөнә ул.

Шулай итеп, яҙыусы Булат, Новиков, Индрил, Байғужа һалдат образдарының һәр береһен үҙ портреты, холоҡ-ҡылығы менән индивидуаль һыҙатлы итеп һүрәтләй алған. Улар һалдаттарҙың теремек типтары булып хәтерҙә ҡала.

Романда эпизодик **Томенко** образы бар. Ул Донбасс шахтерҙары араһынан күтәрелгән большевик. Подпольела ҙур ғына көрәш юлы үткән. Дауыт Юлтый үҙе лә, уның Булат, Новиков, Индрил кеүек һалдаттары ла, һуғыштан сығыу һәм ирек яулауҙың юлын бары ошо Томенко эше большевиктар етәкселегендә генә күрәләр. «Ҡан» романының беренсе һәм икенсе китаптарына һалынған төп идеяларҙың береһе ошо.

**Романдың сюжет, композиция һәм бөтән художество үҙенсәлектәре.** «Ҡан» — ике китаптан торһа ла, сағыштырмаса аҙ геройлы, бер сюжет һыҙығындағы композицион яҡтан йыйнаҡ роман. Хәл-ваҡиғалар алда характерлап үткән һалдат образдары тирәһенә тупланған. Уларҙың нисек фронтҡа барып инеүҙәре, айҙарға, йылдарға һуҙылған окоп тормошо, ҡан, үлемесле яу яланы, тылда булыу, ундағы хәл-ваҡиғалар, ял, аҙашып йөрөүҙәр романдың бер пландағы сюжет һыҙығын төшкил итә.

Романдың икенсе китабында революцион ситуацияларҙың ҡуйыра барыуы байтаҡ киҫкен хәл-ваҡиғалар аша күрһәтелә: демонстрациялар, митингылар, фронтта герман һалдаттары менән «туғанлашыу» эпизодтары, погромдарға ҡаршы сығыу һ. б. Былар аша Февраль революцияһы алды көндәренең мөһим хәлдәре күҙ алдына килә. Икенсе китапта большевик Надеждин образы тулыраҡ һүрәтләнә. Романға яңы образдар ҙа килеп инә. Ваҡиғалар, Булаттың яраланып госпиталдәрҙә ятыуына бәйле рәүештә, Мәскәү, Петроград ҡалаларында ла бара.

Хәл-ваҡиғаларҙың беренсе заттан, Булат исеменән һөйләтелеүе романдың телен һәм стилен халыҡсан

һөйләү теле һәм һөйләү стиленә бик яҡын иткән.

Характерҙарҙы биргәндә Дауыт Юлтый уларҙың холоҡ-ҡылығына, ниндәй шарттарҙа үҫеүенә бәйле рәүештә телмәр үҙенсәлектәрен йәтеш һайлауға бик ныҡ иғтибарлы. Мәҫәлән, ауылда үҫкән Булат менән Байғужаның һөйләүҙәре, телмәр үҙенсәлектәре ҡалала үҫкән эшсе Новиков һәм Индрилдеке менән һис бер төрлө түгел. Крәҫтиән кешеһенә хас булғанса, Булат менән Байғужа телмәрҙәрендә халыҡсан тапҡыр һүҙҙәр, әйтемдәр, мәҡәлдәр байтаҡ. Тормош күренештәрен дә улар тәбиғәт күренештәре менән сағыштырып, матурыраҡ итеп күҙ алдына баҫтыралар.

Характерҙарҙы тыуҙырыу хаҡында Дауыт Юлтыйҙың: «...сәнғәт эше бик ғәжәп бер нескәлек, нәфислек теләй. Бер тибыңды тыуҙырыу, яһау өсөн нескә һыҙыҡтар, урынлы буяуҙар кәрәк. Уның тибына ҡарай һүҙ биреү өсөн шулай уҡ уға яғышып торған характерлы, үлсәүле һүҙҙәр кәрәк», — тигәне бар. Бына ул «Ҡан» романын ижад иткәндә характерҙарҙы тыуҙырыуҙа уларҙың холоҡ-ҡылығын, йәшәү мөхитенә бәйле тел үҙенсәлектәрен оҫта ҡулланып эш итә. Кеше характеры уның телендә лә сағыла.

**Йомғаҡлап** шуны әйтергә мөмкин: Дауыт Юлтый әҙәбиәттең бөтә жанрҙарында ла берҙәй эшләгән күп яҡлы талант эйәһе. Ул асылда совет осорондағы башҡорт әҙәбиәтен нигеҙләшкән әҙип, башҡорт поэзияһына, прозаһына, драматургияһына һәм публицистикаһына ҙур ижади өлөш индергән, бай әҙәби мираҫ ҡалдырған яҙыусы. Башҡорт әҙәби теле формалашыуҙа, милли поэтиканы байыҡтырыуҙа ҙур хеҙмәттәр күрһәткән һүҙ оҫтаһы. Шуға ла ул революциянан һуңғы 20-се, 30-сы йылдар башҡорт әҙәбиәте тарихында классик яҙыусы булып күтәрелде.

• • •

1. Дауыт Юлтыйҙың тормош юлы буйынса үҙегеҙ теҙегән хронологик таблицаны ҡулланып синыфта сығыш яһағыҙ. Уның шәхес булып формалашыуында тормошонда булып үткән ниндәй хәл-ваҡиғалар мөһим роль уйнай? Уның ниндәй кешелек сифаттары һеҙгә ныҡ оҡшай?
2. «Дауыт Юлтый — шағир» тигән тема буйынса фекер алышығыҙ. Уның ниндәй шиғырҙары йәки поэмалары һеҙгә оҡшаны? Ни өсөн?
3. «Ҡарағол» драмаһын уҡыуығыҙ йә спектаклен сәхнәнән йәки телевизорҙан ҡарауығыҙ буйынса уй-фекерегеҙ менән уртаҡлашығыҙ. Драмала барған ваҡиғалар, теп образдар, пьесаның художество эшләнеше тураһында ҡыҫҡаса яҙма яуаптар әҙерләгеҙ.
4. «Ҡан» романының автобиографик әҫәр булыуы хаҡында һөйләгеҙ. Уның автобиографик яҡтарыниҙәрҙә күренә?
5. Булат, Байғужа, Новиков, Индрил образдарына сағыштырмаса характеристика төҙөгеҙ. Образдарҙы һүрәтләүҙә яҙыусының оҫталығын күрһәтегеҙ.